ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

18-24 апрель (алағарай) 2015

№ 16 (642)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Башҡорттарҙың ҡунаҡсыллығын, бигерәк тә ситтән килгәндәргә ихтирамдарын беренсе урынға ҡуйырға кәрәк. Башҡорттоң ҡунағы - изге йән, уның өсөн ул иң һуңғы һарығын йәки тайын булһа ла һуйып ашата. Ҡунаҡ ҙур дәрәжәле булһа ла, башҡорт, ялағайланып, түбәнселеккә төшмәй, уға ярамһаҡланмай, үҙ абруйын һаҡлап ҡала белә.*

**Д.П. Никольский.**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ауылыбыҙҙан айырып...**

балалар йортона алып киттеләр




6

**Булмышыбыҙ, үҙ йөҙөбөҙ менән...**



донъя кимәлендә танылыу юлы ул - Башҡорт Википедияһы

8-9

**Бабич асылы менән осрашыу**



11

**Ҡарсәйем һандығы**



12

**ТВ-программа** 14


## УЙЛЫҒА - УЙ

✓ Башҡорт Википедияһы - телдең байлығын да күрһәтеү ул. Әгәр Башҡорт Википедияһына балаларҙы йәлеп итәбеҙ икән, мәҡәлә яҙған ваҡытта уларҙың телмәре байый, аң даирәләре киңәйә, зиһене үҫешә. Шул уҡ ваҡытта Википедияның дуҫтары бик күп булыуын иҫәпкә алып, унда һәр тараф ирекмәндәре менән бергәләшеп дөйөм бер виртуаль клуб, дөйөм бер ҡор төҙөп, Башҡортостан тураһында һөйләргә, уның хозурлығын асып бирергә, телебеҙҙең матурлығын, байлығын күрһәтергә була. Был бит үҙе үк илһөйәрлек тәрбиәләй.

✓ Үҙебеҙҙекен үҙебеҙҙеке тип иҫбат итеп өйрәнергә ваҡыт инде беҙгә. Башҡорт Википедияһы - ул донъяға ишек, донъя киңлегенә алып сығасаҡ оло юл. Был юлға беҙ үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы ғына түгел, ә ниндәйлегебеҙҙе белеп-белгертеп, булғанын раҫлап аяҡ баҫырға тейешбеҙ. Югиһә, булғанын юҡҡа сығарырға әҙер торабыҙ, йәки дөйәләй олоғара эш башлаған саҡта төймәләй генә мәсьәләлә бәхәс ҡуптарабыҙ.

**(8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ).**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Ҡалаларҙағы тышҡы реклама торошо һеҙҙе ҡәнәғәтләндерәме, уның файҙаһын нимәлә күрәһегеҙ?

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, журналист:*** Рекламалар, әрһеҙләшеп, тормошобоҙға ныҡлы үтеп инде, тәүҙәрәк уны бөтөнләй ҡабул итмәгәндәргә лә, ахырҙа, был хәл менән килешергә тура килде. Хәҙер иһә рекламаһыҙ - донъя һанһыҙ, тигән һымағыраҡ та булып бара түгелме? Бер яҡтан, әйләнә-тирәне сыбарлап, күҙгә инеп барған артыҡ ныҡ бәйләнсеклеге менән һаман һарыуҙы ҡайнатһа ла, икенсе яҡтан, бөгөнгө ҡулланыу баҙарындағы тауар һәм хеҙмәт күрһәтеү төрлөлөгө араһында йүнәлеш алырға булышлыҡ итеүен дә кире ҡағып булмай. Һүҙ намыҫлы реклама хаҡында, тип әйтергә итһәм дә, "Яҡшы тауар рекламаға мохтаж түгел," тигән хәҡиҡәт тә иҫкә килеп төшә. Шулайын шулай ҙа, ләкин реклама хәҙерге көндә йәмәғәтселек ихтыяжын тәьмин итеүсе айырым бер социаль институтҡа әүерелде. Ул берәй тауар йә бренд хаҡында мәғлүмәт биреү менән генә сикләнеп ҡалмай, кешеләрҙе теге йәки был фекергә инандырыу, ниндәйҙер ғәмәлгә этәреү, ҡарарға килеүгә булышлыҡ итеү кеүек функцияларҙы ла үтәй. Бына ошонда башлана ла инде әлеге әйткән әрһеҙлек, самаһыҙлыҡ, урыны менән хатта законһыҙлыҡ күренештәре. Күптән түгел булып үткән БР Хөкүмәте ултырышының көн тәртибенә юҡҡа ғына сығарылманы был мәсьәлә - Башҡортостан Республикаһында тышҡы реклама баҙарының үҫеш концепцияһы. "Республиканың ниндәй генә ҡала, район биләмәһенә барһаң да, реклама щиттарындағы телә һә ниндәй йүнһеҙлекте күрмәйенсә, унда инеп булмай,- тине төбәк Башлығы Рөстәм Хәмитов. - Был йәһәттән тәртип булдырыу тураһында нисә тапҡыр әйттем. Ҡалаларҙың ошо юл менән аҡса эшләүен аңларға ла була. Бер яҡтан, тар ҡарашлылыҡ, әҙәпһеҙлек, икенсе яҡтан, ҡаҙна өсөн аҙ булһа ла аҡса эшләү мөмкинлеге. Мәсьәләнең әхлаҡ яғы мөһимерәк, минеңсә. Ҡалаларыбыҙҙы йүнһеҙ рекламаларҙан таҙартырға кәрәк. 17 миллиард һумлыҡ бюджеты булған ҡала өсөн 170 миллионлы килем биреүсе әхлаҡһыҙ рекламаның кәрәге бармы икән һуң?" - тип, Республика Башлығы 2016 йылға Рәсәй законын боҙоуға юл ҡуйған тышҡы рекламаларҙан ҡотолоуҙы һәм рекламаның мәғлүмәти йөкмәткеһенә тәнҡит күҙлегенән ҡарауҙы ныҡлы талап итте.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "АЛТМЫШ ЙЫЛДАН ҺУҢ...

## тәүге тапҡыр диктант яҙҙым"



**Үткән аҙнала Өфөлә Башҡорт дәүләт университетының төп корпусында, шулай уҡ уҡыу йортоноң Сибай, Учалы, Стәрлетамаҡ, Бөрө, Нефтекама филиалдарында, баш ҡаланың һәм республиканың күп кенә мәктәптәрендә башҡорт теленән региональ диктант ойошторолдо. Был сара "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР законын тормошҡа ашырыу буйынса БР Хөкүмәте эргәһендәге комиссияның Терминология хеҙмәте һәм Башҡорт дәүләт университеты тәҡдиме менән үткәрелде һәм йәмәғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы.**

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*БДУ аудиторияһында диктант яҙыусылар.*

12+

✓ Төҫлөрәк, сағыуыраҡ итеп, баҙыҡ шрифт һәм орнаменттар ҡулланылһа, отошлораҡ булыр ине. Өҫтәүенә, бер башҡорт шағирының портретын әллә нисәмә урында күреп ғәжәпләндем, әйтерһең дә, башҡа яҙыусыларыбыҙ юҡ!



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 апрелдән Башҡортостандың бөтә почта бүлексәләрендә 2015 йылдың икенсе ярты йыллығына 50665 индекслы "Киске Өфө"гә яҙылыу 539 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 569 һум 76 тин тәшкил итә.**




**Февралдә-мартта гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан:** Баймаҡ районы Ярат ауылынан Зөһрә Ҡарамырҙина - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**;

Мәләүез районы Смаҡ ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов, Ишембай ҡалаһынан Р. Әхмәров, Асҡын районы Үрмияз ауылынан Сәлимә Әбүбәкирова - Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**;

Баймаҡ районы Сәйғәфәр ауылынан Фирҙәүес Мырҙабулатова, Октябрьский ҡалаһынан Миҙхәт Шәрипов, Әбйәлил районы Йәлембәт ауылынан Ғәйнетдин Шәмсетдинов - **"Антология поэзии Башкортостана"**;

Әбйәлил районы Буранғол ауылынан Бәширә Усманова, Амангилде ауылынан Иштимер Ғүмәров, Шишмә районы Дурасово ауылынан Венера Хәйруллина, Баймаҡ ҡалаһынан Фазылетдин Сөләймәнов, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан Сәмғиә Насипова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**;

Көйөргәҙе районы Бабалар ауылынан Радик Хәмитов, Учалы ҡалаһынан Венера Заһирова, Мәсетле районы Әбдрәхим ауылынан Людмила Зиннурова, Дәүләкән районы Мәкәш ауылынан Роберт Ғәйзуллин, Октябрьский ҡалаһынан Әхмәҙулла Хасаев, Баймаҡ районы Урғаҙа ауылынан Мәхмүтйән Йәрмөхәмәтов, Бәхтегәрәй ауылынан Риза Нәҙербаев, Ярат ауылынан Миңлебай Дәүләтбаев, Дилара Йәнбирҙина, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Ф. Дилмөхәмәтова - **Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы"**;

Ишембай ҡалаһынан Рәйсә Бикбулатова, Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Х. Ерьесев, Аҡморон ауылынан Г. Исламғолова, Ҡырмыҫҡалы районы Ибраһим ауылынан Фәниә Ғәлиуллина, Учалы районы Муса ауылынан Сәлиха Фәхретдинова,Оҙонгүл ауылынан Жәүәт Миһранов, Өфөнән Йәүһәрә Зәйниева, Мәләүез ҡалаһынан Салауат Йәрмөхәмәтов, Хәйбулла районы Иләс ауылынан Ғәлиә Рәхмәтова, Дәүләкән ҡалаһынан Фәтиха Шәмсетдинова - **башҡортса "Дини календарь"**;

Салауат районы Мәсетле ауылынан Лениза Мөхәмәтшина, Баш. Илсекәй ауылынан Мәҙинә Сәсәнбаева, Янғантау ауылынан А. Ишбулдина, Учалы районы Бәләкәй Ҡаҙаҡкол ауылынан Роза Насирова, Әбйәлил районы Асҡар ауылынан Фәтиха Хәкимова, Сибай ҡалаһынан Х. Ишмөхәмәтов, Баймаҡ районы Шүлкә ауылынан Дилбәр Хәсәнова, Юлыҡ ауылынан Х. Азаматова, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Чурин, Салауат ҡалаһынан А. Солтанморатова - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды. Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Ҡалаларҙағы тышҡы реклама торошо һеҙҙе ҡәнәғәтләндерәме, уның файҙаһын нимәлә күрәһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Өлфәт КОБАҒОШОВ, скульптор, рәссам, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Республика етәкселеге тарафынан мәсьәлә бик дөрөҫ ҡуйыла, сөнки реклама ҡаланың йөҙөн билдәләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Реклама щиттары, конструкциялар һәм электрон таблолар мәғлүмәт сығанағы булараҡ ҡына хеҙмәт итмәй, ә ҡаланың биҙәлеше, уның мәҙәни-социаль йөҙөн, кимәлен билдәләүсе бер күрһәткес тә, тип уйлайым. Заман мегаполистары өсөн рекламаның юғары технологик ҡоролмалар өлөшөн арттырыу, ҡала төҙөлөшөнөң архитектура һынланышын һәм стилен һаҡларға тырышып, уның ыңғай имиджын булдырыу йәһәтенән сығып эш итеү кәрәк. Шул уҡ ваҡытта тышҡы форманың йөкмәткегә тап килеүен күҙәтеү ҙә бик мөһим. Күп осраҡта реклама фәҡәт мәғлүмәт сығанағы булараҡ ҡабул ителә, ә бына уның социаль-тәрбиәүи әһәмиәтенә иғтибар бирелеп еткерелмәй, эстетик зауыҡ формалаштырыу йәһәтенән дә мөмкинлектәре файҙаланылмай. Әйткәндәй, быйыл баш ҡалабыҙҙа Әҙәбиәт йылы айҡанлы рус һәм башҡорт яҙыусыларының портреттары менән уларҙың аҡыллы фекерҙәре яҙылған щиттар күренә башланы. Ҙур ҡала йөҙөндә күҙ өйрәнмәгән шатлыҡлы күренеш был, улар яңыртыла барып, артабан да дауам ителһә, бик һәйбәт эстетик-тәрбиәүи сара булмаҡсы. Ләкин был яҡшы башланғыс, һәр ваҡыттағыса, ашығып, тейешле белгестәр менән кәңәшләшмәйерәк эшләнгәне күҙгә бәрелеп, бер мискә балды боҙған бер ҡалаҡ дегеттәй, кәйефте ҡырҙы барыбер. Беренсенән, әлеге примитивлыҡ, тигәндәй, щиттарҙың аҡ-ҡара төҫтә, бер ниндәй художество-биҙәү саралары ҡулланылмай, ярлы ғына итеп яҙып эленеүе бөгөнгө сағыу мөхитебеҙ фонында үҙенә әллә ни йәлеп итеп тормай. Төҫлөрәк, сағыуыраҡ итеп, баҙыҡ шрифт һәм орнаменттар ҡулланылһа, отошлораҡ булыр ине. Өҫтәүенә, бер башҡорт шағирының портретын әллә нисәмә урында - үҙәк урамдарҙа ла, Сипайловола ла күреп ғәжәпләндем, әйтерһең дә, беҙҙең башҡа яҙыусыларыбыҙ юҡ! Ярай ҙа, Сипайловола - Баязит Бикбайҙы, Владивосток урамының кеше күрмәҫлек бер аулаҡ урынында Рәми Ғарипов портретын күреп ҡалдым. Ә ҡайҙа зыялыларыбыҙ Рәшит Шәкүр, Һәҙиә Дәүләтшина, Шәйехзада Бабич, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев? Башҡорт әҙәбиәте менән таныш булмаған кешелә, бер үк авторҙар эленеп тороуын күреп, хата фекер тыуыуы ла мөмкин бит. Щиттарҙағы өҙөктәрҙең тематикаһын сикләп, мотлаҡ яҙыусы хеҙмәте, китап уҡыу тураһында ғына түгел, бәлки, яҙыусы әҫәренән уңышлы ғына өҙөктәр һайлап биреү күпкә йоғонтолораҡ булыр ине, минеңсә. Ярай ҙа бер аҙ ваҡыттан щиттар яңыртылып, башҡа күренеклеләребеҙгә лә сират етһә... Әҙәбиәт белгестәре, туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары, йәмәғәтселек менән кәңәшләшеп эшләү кәрәк кәрәк булған бында.

***Ринат БИКБИРҘИН, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Рекламаларҙың заман талаптарына яуап бирергә тейешлеге хаҡында һөйләшерҙән алда уның өсөн яуаплы кешеләрҙең белем һәм мәҙәни кимәле хаҡында һүҙ алып барыу дөрөҫөрәк булыр ине, тигән фекерҙәмен үҙем. Баш ҡала һынлы Өфөбөҙ урамдарында хаталы яҙыуҙар эленеп тороуы бик хурлыҡлы күренеш түгелме ни, юғиһә? Әле бына "Йәшлек" гәзитенең быйылғы 3 апрель һанында хәбәрсе Алһыу Ишемғолованың репликаһын уҡып, ғәжәпкә ҡалдым: үҙәк урамдарҙың береһендә халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның әҙип хеҙмәте тураһындағы һүҙҙәре яҙылған баннерҙағы хаталар тураһында ул. Фотохәбәрсе Юлай Кәримов был щитты фотоға төшөрөп тә алған хатта. Ысынлап та, бәләкәй генә бер һөйләмдә наҙан рекламасылар тарафынан өс тупаҫ хата ебәрелгән! Ғәрлегендән ятып үлерһең, әллә юрый шулай эшләйҙәрме икән? Улар бит яҙыусынан да, башҡорт теленән дә түгел, ә үҙҙәренең наҙанлығынан көлә! Дәүләт телен һанға һуҡмайһың икән, уны яҡлауға алған законды һанла! Яңыраҡ Әй урамынан үтеп барғанда "Һанлы техника йунэтеу" тигән хаталы яҙыуға тап булып, тағы бер көйҙөм. Хужалары тап булманы, унда тағы инеп сығаһы бар әле. Бына ошондай наҙанлыҡ, битарафлыҡ һәм оятһыҙлыҡ осраҡтарын бөтөрмәй тороп, башҡалабыҙ урамдарына ниндәй генә изге һүҙҙәр яҙып ҡуйһаҡ та, улар кеше йөрәгенә үтеп инмәйәсәк, сөнки иң тәүҙә йөкмәтке түгел, ә фекерҙе юҡҡа сығарыусы хаталар аҡшайып күренеп тора бит...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**




*Бына ошондай рекламалар "биҙәй" ҡалабыҙ йөҙөн.*

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓16 апрелдә Рәсәй Президенты В. В. Путин граждандар менән быйыл 13-сө тапҡыр "Тура бәйләнеш" үткәрҙе. Мәскәүҙең 200-ләп журналист, ҡунаҡтар һәм эксперттар йыйылған Ҡунаҡ һарайындағы студиянан тура эфирҙа В. Путин илдең бөтә төбәктәренән килгән һорауҙарға дүрт сәғәт дауамында яуап бирҙе. Тәүҙә ул үткән йыл йомғаҡтарына туҡталып, унан һуң санкциялар, Украина менән Рәсәй мөнәсәбәттәре, эске сәйәсәт мәсьәләләре, ил иҡтисады, ауыл хужалығының етештереү тармаҡтары һәм башҡа бик күп өлкәләр буйынса граждандар һорауҙарына яуаптар бирҙе. "Тура бәйләнеш"кә Президент исеменә килгән 3 миллиондан ашыу һорау теркәлде. Уларҙың береһе лә иғтибарҙан ситтә тороп ҡалмаясаҡ, ентекле өйрәнелеп, улар буйынса аныҡ саралар күреләсәк, тип билдәләнде "Тура бәйләнеш"тә.

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй һәм Ҡаҙағстан араһында хеҙмәттәшлек буйынса хөкүмәт-ара комиссияһы ағзалары - Ҡаҙағстандың инвестициялар һәм үҫеш буйынса беренсе вице-министры Женис Ҡасымбәков, Рәсәйҙең транспорт министры урынбаҫары Сергей Аристов һәм Рәсәй Транспорт министрлығының Халыҡ-ара хеҙмәттәшлек департаменты директоры Роман Александров менән осрашыу үткәрҙе. Яҡтар транспорт инфраструктураһы үҫеше мәсьәләләрен, шул иҫәптән ағымдағы йылда Өфө менән Ҡаҙағстан араһында һауа юлын асыу мөмкинлеген тикшерҙе.

✓Ошо уҡ осрашыуҙа "Европа - Көнбайыш Ҡытай" халыҡ-ара маршрут төҙөлөшө барышы, атап әйткәндә, Ырымбур йүнәлешендәге һәм Ҡаҙағстан сиге йүнәлешендәге автомобиль юлы участкаһы тикшерелде. "Европа - Көнбайыш Ҡытай" халыҡ-ара маршруты Рәсәй, Ҡаҙағстан һәм Ҡытай биләмәһе буйлап үтә. Илдәр араһында маршрутты төҙөү тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылған һәм дәүләт сиктәренә сығыу урындары билдәләнгән. Рәсәйҙә юл Санкт-Петербургтан башлана һәм Ырымбур өлкәһенең Сагарчин ауылы янында тамамлана. Маршруттың дөйөм оҙонлоғо 8,5 мең километр тәшкил итә, шуның 2,2 мең километры Рәсәй биләмәһе буйлап үтә.

✓ "Йәшел сауҡалыҡ" районында урынлашҡан тәгәрмәстән - бөтә ҡала тиерлек ус төбөндәге кеүек. Был аттракциондың балаларға ғына түгел, ололарға ла матур ял минуттары бүләк итеүенә шикләнмәйем.



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ДОНЪЯ КӨТӨҮ...

## туйҙан башланамы?



**Ҡыҙым ихтыярһыҙҙан курсташ ҡыҙҙарының әңгәмәһенә шаһит булыуы тураһында һөйләнә. Ул бөтөн ынтылыштары сепрәк-сапраҡ менән ир-егет эргәһенән ары китә алмаған блондинкалар араһына үҙенең яңылыш килеп эләгеүен күптән аңлаһа ла, ҡайһы саҡ улар "биләмәһендә" булып, тормошҡа улар күҙлегенән бер ҡараш ташлап алыуҙы мәрәкә күрә.**

Күрше партала ултырыусы ҡыҙҙарҙың береһе - йәшкелт күҙле, буялған сәсле Кристина быйыл йәй кейәүгә сығырға йыйына икән. Туй сығымдары тураһында борсола. "Кәмендә 300 мең һум булырға тейеш был сығымар! Тик был суммаға кәләш өсөн туй күлдәге лә, никах балдағы ла,"Матурлыҡ салоны" хеҙмәттәре лә инмәй," - тип һалдыра был өлкәлә тәжрибәле Алина. Һуңғы курсҡа барып еткәнсе, ике тапҡыр кейәүгә сығырға өлгөргән икән был сибәркәй. Шуға ла курсташтары донъяуи мәсьәләләрҙә тап уға кәңәш-төңәш итеүҙе хуп күрә.

Түңәрәк кенә һандарҙан күҙҙәре тағы ла ныҡыраҡ түңәрәкләнгән Кристинаны йәлләп, йыуата башлаған ҡыҙҙар. Әйтмәнә лә, аңлап торалар инде: уҡытыусы булып эшләгән әсәһе менән үгәй атаһынан был суммаға өмөт итергә тура килмәйәсәк. Буласаҡ кейәү үҙе фәҡир студент ҡына әле. Дөрөҫ, ҙур ғына бер сауҙа үҙәгендә менеджер булып эшләп йөрөһә лә, бар тапҡаны Кристина менән яллап йәшәгән бер бүлмәле фатир өсөн түләүгә китеп тора. "Туктағыҙ, ә нинә кәрәк һуң ундай туй? Дөрөҫөрәге - шоу бит ул хәҙер, туй түгел. Иң яҡындарың менән йыйнаҡ ҡына итеп тә үткәрергә мөмкиндер бит ундай интим тантананы?" - тип бәхәсләшә башлай ҡыҙҙар. Ләкин Кристинаны уйынан ҡайтара алмайҙар. "Стасты кредит алырға өгөтләйәсәкмен",- була уның ҡарары.

- Әсәй, һин нисек уйлайһың, ҡыҙҙар Кристинаға дөрөҫ кәңәш бирмәнеме ни? Ә ул үпкәләгәндәй итте хатта. Мин кемдән кәм, йәнәһе...Иҫтәлекле, онотолмаҫлыҡ булһын ул көн, тигән була. Ә бит Стасы менән яңы ғына ҡауышмаған, йылдан ашыу бергә йәшәйҙәр. Тимәк, туй уларға ҡауышыу шатлығының тәүге саф хистәрен кисереү өсөн түгел, ә башҡалар кеүек булып күренеү өсөн кәрәк... Мин быны аңламайым!

- Был һәр кемдең шәхси эше инде, балам, уға нисек ҡыҙылаһың? "Йөнә телгән - йылан ите ашаған", тиҙәрме? Атаәсәләре лә төйнәнеп торғандыр, бөтөнләй ярҙамһыҙ ҡалдырмаҫтар балаларын. Егете лә тырыш күренә - табыр, - тип кенә ҡуйһам да, баламдың дәлилдәре баштан сыҡмай йонсотто бер талай. Ҡыҙым әйтмешләй (ул, әлбиттә, йәшлеге менән максималист булараҡ та фекер йөрөтәләр), ике йәш кеше тормоштарын бергә бәйләү тантанаһына үҙҙәре лә белеп бөтөрмәгән кәмендә иллеләп кешене саҡырып, ике-өс көн буйына шул гәмдең ашап-эсеп, күңел асыуын тамаша ҡылып ултырырға тейеш булып сыға. Аҡса түләп! Өҫтәүенә, ҡуш балдаҡлы, ҡыңғыраулы машинаға - түлә, туйҙы алып барыусы тамадаға - түлә, фотографҡа - түлә... Ҡыҙым әйтмешләй, билдәле бер структураларға аҡса эшләү яйы ғына тыуҙырыла бит, юғиһә.

- Юҡ, мин бындай инсценировка менән килешмәйем!- тип ҡыҙа һаман ҡыҙым. - Фарс бит был. Шулай шаулатып-гөрләтеп, ата-әсәһен йолондороп туй үткәрәләр ҙә, бер аҙҙан ирешеп-талашып, бер-беренә әйләнеп ҡарамаҫлыҡ хәлгә килеп, айырылышып та ҡуялар. Шул да булдымы иҫтәлекле дата? Туй көнөн түгел, ә бергә булған гүмереңдең һәр көнөн, һәр йылын мәңгелеккә хәтерҙә ҡалырлыҡ итеп үткәрергә кәрәк, шулай түгелме ни? Туй урынына ҡайһы бер романтиктар рюкзактарын артмаҡлап, тәбиғәткә китәләр, тауҙарға артылалар, диңгеҙ төбөнә төшәләр, хатта күктәргә ашып, парлашып парашюттан һикерәләр. Миңә тап ана шундайҙарҙың донъяға ҡарашы яҡын һәм аңлайышлы. Эх, туйҙамы ни эш, нинә Кристина шуны аңламай икән?..

Был ялҡынлы монологынан һуң мин балама икенсе күҙҙәр менән баҡтым. Манлай күҙе менән түгел, ул астырған күңел күҙем менән. Ысынлап та, нинә шулай булмаҫҡа тейеш һуң әле? Нинә беҙ бөтөн нәмәгә маңлай күҙҙәре менән генә ҡарап, мейеләге йоҡлап ятҡан нейрондарҙы ҡуҙғытыуҙан ҡурҡып, ярымшарҙарыбыҙҙың күнегелгән "һуҡмаҡтары" буйлап ҡына фекер йөрөтөргә тырышабыҙ? Саҡ ҡына икенсе төрлө уйлаған йә эшләгән кешегә (ә ундайҙар, үкенескә, бик һирәк) "сәйер", "ҡыҙыҡ" йә "етешмәгән" ҡушаматтары тағырға әҙер торабыҙ? Бөтәһе шикелле, башҡалар кеүек үк булмағаны һәм уйламағаны өсөн... Ә һеҙ килешәһегеҙме быны менән?

**Ғәлиә БИКТИМЕРОВА.**

*БАШ ЙОРТОБОҘ*

# ТАҒЫ КИЛӘБЕҘ ӘЛЕ...

**Йыл да балаларҙың яҙғы каникулында уларҙы Өфөгә алып килеү ғаилә традициябыҙға әйләнгән. Быйыл да матур йоланы боҙманыҡ, рәхәтләнеп баш ҡалабыҙҙа ял итеп ҡайттыҡ. Йыл һайын килеп торһаҡ та, Өфөбөҙҙө һәр ваҡыт яңынан асҡандай булам. Матурлығын бер ҙә ташламай гүзәл баш ҡалабыҙ, киреһенсә, ваҡыт үткән һайын күркәмләнә генә бара. Йылдан-йыл олпатлана, ләкин йәшлек һөйкөмлөгөн юғалтмай. Етдиләнә, тик шуҡлығы, шаянлығы һүлпәнәймәй. Төҫө үҙгәрә, шулай ҙа мин белгән һәм өйрәнгән мөләйемлеге һүрелмәй.**

Ҡалаға ингәс тә күпләп йорттар төҙөләүе күҙгә ташлана. Көн дә үҙенә йәҙәрләгән яңы кеше ҡабул итеүсе ҡалала күп ҡатлы йорттар төҙөләүенә аптырарға түгел, әлбиттә. Тимәк, һатып алыусылары бар һәм ҡала тағы ла ҙураясаҡ, балалар күбәйәсәк, халыҡ һаны артасаҡ. Ләкин ул балаларға уйнар урын булырмы - шуныһы һорау тыуҙыра. Әлеге көндә лә һәр йорт алдында махсус балалар майҙансыҡтары юҡ кимәлендә, ә йорттар һаны артҡан һайын, улар өсөн урын табылырмы, тигән һорау тыуа. Балаларға ҡағылышлы тағы бер мәсьәләне күтәргем килә - бихисап сауҙа үҙәктәрендә урынлашҡан балалар майҙансыҡтары күптәрләөк тәҡдим итә алмай. Бөтәһендә лә тиерлек бер үк уйынсыҡтар, бер иш аттракциондар, уйын майҙансыҡтары бәләкәй һәм тынсыу. Ләкин был етешһеҙлектәрҙе һуңғы ваҡытта ҡалҡып сыҡҡан ике күҙәтеү тәгәрмәсе бер аҙ ҡаплай. Бигерәк тә "Йәшел сауҡалыҡ" районында урынлашҡан тәгәрмәстән - бөтә ҡала тиерлек ус төбөндәге кеүек. Был аттракциондың балаларға ғына түгел, ололарға ла матур ял минуттары бүләк итеүенә шикләнмәйем.

Артабанғы һүҙемдә "Ирәмәл" сауҙа комплексы ҡаршыһындағы ҙур плакат тураһындағы фекерем менән уртаҡлашҡым килә. Әллә ҡайҙан уҡ үҙенә иғтибарҙы йәлеп итеп торған был билбордта башҡорт ҡыҙы һүрәтләнгән, буғай. Һәр хәлдә, кейеменә, биҙәүестәренә, сәсенә ҡарағанда, ошондай һығымтаға килдем, ләкин уның аяҡтарын ялтыратып, күлдәк итәген күтәреп бейеп йөрөүенә иғтибар итһәң, был фекерҙән ситләшәһең. Беҙҙең тыйнаҡ башҡорт ҡыҙҙары бер ҡасан да ундай түбәнселеккә төшмәгән, бейегәндә аяҡтарын күрһәтеү түгел, күҙҙәрен дә һирпеп кенә ҡараған. Бәлки, мин артыҡ ҡиҫкенләштерәмдер, ләкин күңелемдә ауыр тойғолар ҡалдырған күренеш хаҡында әйтмәйенсә үтә алманым.

Балаларҙың трамвайҙа йөрөү теләктәрен дә тормошҡа ашырҙыҡ. Яңы трамвайға эләгеүебеҙ уларҙың тәьҫораттарын тағы ла көсәйтә төштө. Тауыш-тынһыҙ тиерлек ҡала урамдарын гиҙгән был яңы трамвайҙарҙа эшкә барыу-ҡайтыу үҙе бер байрам кеүектер, тип ҡуйҙы тормош иптәшем үҙенең студент саҡтағы иҫке трамвайҙа йөрөүен иҫкә алып. Кондукторҙың ипле һөйләшеүе, һәр һорауға асыҡ һәм төплө яуап биреүе, бөхтәлеге оҡшаны. Ҡаланың "Башавтотранс" автобустарында ла йөрөргә тура килде, улар ҙа тик ыңғай тойғолар ҡалдырҙы.

Ғөмүмән алғанда, юлыбыҙ уңды, ялыбыҙ күңелле булды. Килһә йылда ла матур ҡалабыҙға, йөрәккә яҡын Өфөбөҙгә ашҡынып килербеҙ. Бер йыл эсендә ҡала тормошонда тик ыңғай үҙгәрештәр генә булыуын теләйем.

**Миңзәлә ДӘУЛӘТБИРҘИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанға эш сәфәре менән Рәсәйҙең ауыл хужалығы министры Николай Федоров килде. Сәфәр барышында Ҡырмыҫҡалы районының Бекет ауылындағы "Артемида" тоҡом малы хужалығы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең һөтсөләк-тауар фермаһында, Өфө районының Булгаков ҡасабаһындағы "Цюрупа исемендәге агрофирма" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтте һәм "Алексеевка" совхозы дәүләт унитар ауыл хужалығы предприятиеһына барҙы. Унда министр һөт эшкәртеү заводы, ҡатнаш аҙыҡ цехы һәм теплица комплексы эше менән танышты.

✓Башҡортостанда 9 марттан 31-нә тиклем үткәрелгән "Лесовоз" операцияһында ҡануниятте боҙоуҙың - 118, шул иҫәптән урманды законһыҙ ҡырҡыуҙың 15 осрағы асыҡланған. Республиканың Урман хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, килтерелгән зыян күләме 556 мең һум тәшкил иткән. Асыҡланған ҡануниәт боҙоуҙар буйынса федераль дәүләт урман һәм янғын күҙәтеүе инспекторҙары административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында 127 протокол төҙөгән. Законһыҙ урман ҡырҡыу фактары буйынса мәғлүмәттәр хоҡуҡ һаҡлау органдарына тапшырылған. Ете енәйәт эше ҡуҙғатылған.

✓Волонтерҙар Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттары үҙенсәлектәренең береһе буласаҡ, тип иҫәпләй Башҡортостан Республикаһы министры Руслан Мирсаяпов. "Былтыр беҙ Бразилияла БРИКС саммитында һәм Дүшәнбелә Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы дәүләттәре башлыҡтары ултырышында ҡатнаштыҡ. Был форумдарҙа ирекмәндәрҙе осратманыҡ. Таныш булмаған ҡалала юл таба алыу ҡыйын. Өфөләге волонтерҙар иһә ҡунаҡсыллыҡ мөхитен булдырасаҡ", - тип билдәләне Руслан Мирсаяпов. Өфөләге халыҡ-ара саммиттарҙа эшләү өсөн 500 ирекмән һайлап алынған.

✓Быйыл республика балалар йорттары тәрбиәләнеүселәре араһында "Бала саҡ йондоҙҙары" конкурсының төбәк этабы Салауат ҡалаһында үтә. Ижади бәйге Волга буйы федераль округының "Бала саҡты ҡайтарыу" проекты сиктәрендә уҙғарыла. Конкурс ике этапта ойошторолдо. Тәүге һайлап алыу балалар йорттарында уҙҙы. Бәйгегә 21 балалар йортонан ғаризалар килгән. Республика этабында 10-18 йәшлек 120 бала уҙ көсөн һынап ҡараясаҡ. Еңеүселәр 11-12 июндә Йошкар-Ола ҡалаһында уҙасаҡ фестивалдә ҡатнашасаҡ.

**"Башинформ"дан.**

АҢ БУЛЫҒЫҘ!

# КРЕДИТЫ - МИКРО...

## баш ауыртыуы - макро

**Интернет селтәрендә бер ниндәй белешмәһеҙ, кредит тарихының насар булыуына ҡарамайынса, тик паспортты ғына күрһәтеп, тиҙ арала алып була торған кредиттар хаҡындағы игландар бихисап. Бер-нисә көнгә йәки айға ҙур булмаған суммалағы аҡса тәҡдим итеүсе бындай ойошмаларҙың офистары аҙым һайын тиерлек осрауына ла күптән күнеп бөттөк, буғай. Халыҡҡа бик тә ҡулайлы шарттарҙа кредит тәҡдим итеүсе ойошмалар артында нимә тора һәм уларға мөрәжәғәт итеү ниндәй юғалтыуҙарға килтерергә мөмкин?**

Бындай экспресс аҡсаларҙың ставкаһы 200 процентҡа тиклем барып етеүе, ә кире ҡайтарғанда түләнгән аҡса суммаһы иҫте китәрерлек ҙур булыуы ихтимал. Шуға күрә, тормошта ниндәй генә ауыр финанс хәлгә тарыһағыҙ ҙа, бәләкәй кредит (микрокредит) биреүсе ойошмалар менән бәйләнмәгеҙ, тип иҫкәртә эксперттар.

Бәләкәй күләмдәге аҡсаларҙы, ғәҙәттә, микрофинанс ойошмалар (МФО) бирә. Бөгөнгө көндә улар араһында "Йорттағы аҡсалар", "МигКредит", "Микрофинанс" һәм башҡа төрлө эреле-ваҡлы ойошмалар бар. Ссуда биреү шарттары төрлөсә булһа ла, уларҙы бәләкәй күләмдәге аҡса суммаһы менән генә эш итеү тәртибе берләшерә. Мәҫәлән, ҡайһы бер микроойошмаларҙа 30 мең һумды 52 аҙнаға тиклем алып булһа, икенселәрендә был ваҡыт 24 аҙнаға йәки бер айға ғына ҡайтып ҡала. Процент ставкалары ла төрлө ойошмала төрлөсә тирбәлә һәм аҡса алып тороу ваҡытына, суммаға һәм башҡа факторҙарға бәйләнгән.

Миҫал өсөн бер-нисә микрофинанс ойошмаһы тәҡдим иткән кредиттар буйынса ҡайтарыласаҡ аҡса суммаһын күҙ һалайыҡ. Быны өсөн МФО сайттарында бирелгән онлайн-калькуляторҙы ҡулланырға мөмкин. Шулай "Йорттағы аҡсалар"ҙан ("Домашние деньги") 52 аҙнаға иҫәпләнеп алынған 30 мең һумды тәғәйенләнгән ваҡытҡа 82004 һум итеп ҡайтарасаҡһығыҙ. Кредит буйынса реаль ставка 173,3 процент тәшкил итәсәк. Әгәр ҙә шунда уҡ 26 аҙна эсендә ҡайтарыу шарты менән 15 мең алһағыҙ - 26572 һумды түләргә кәрәк буласаҡ. Был осраҡта процент ставкаһы - 77,1 процент. Ә "МигКредит"та шул уҡ 30 мең һумды 24 аҙнанан һуң ойошма иҫәбенә 63 мең һум, ә ошо уҡ ваҡытҡа алынған 15 мең һумды 31800 һум күләмдә күсерергә кәрәк буласаҡ. Ставкалар, ярашлы рәүештә, 110 һәм 112 процент.

Башҡа ошондай уҡ ойошмаларҙан да бурысҡа алынған аҡсаны бер-нисә айҙан һуң күпкә арттырып бирергә тура киләсәк. Шуға күрә, бик ауыр финанс хәлгә тарығанда ла бындай ойошмаларҙың хеҙмәте менән ҡулланыу урынһыҙ һәм кеҫә өсөн бик тә зарарлы икәнлеге хаҡында онотмау хәйерле.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӨФӨ - ЕҢЕҮСЕЛӘР АРАҺЫНДА!

**Өфө "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсы йомғаҡтары буйынса республика ҡала округтары рейтингында өсөнсө урын алды. Икенсе урында - Стәрлетамаҡ, Октябрьский ҡалаһы еңеүсе тип танылды.**

Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, конкурс урындағы үҙидаралыҡ органдары эшенең һөҙөмтәлелеген арттырыу, республиканың иң яҡшы муниципаль берәмектәре тәжрибәһен өйрәнеү һәм таратыу, шулай уҡ урындағы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән муниципаль берәмектәрҙе билдәләү маҡсатында уҙғарыла.

Краснокама районының Арлан советы - ике меңгә тиклем халыҡ йәшәгән иң яҡшы ауыл, Әлшәй районының Раевка ауыл советы ике меңдән ашыу халыҡ йәшәгән иң яҡшы ауыл тип танылды. "Ауыл биләмәһе административ үҙәге менән иң яҡшы муниципаль район" номинацияһында - Тәтешле, "Ҡала үҙәге менән иң яҡшы район" номинацияһында Мәләүез районы еңеү яуланы.

# МИЛЛӘТТӘР ҠОРҒА ЙЫЙЫЛА

**28 апрелдә Өфөлә Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһының III съезы үтәсәк.**

Ойошма республикала йәшәгән халыҡ вәкилдәренең 30-ҙан ашыу рәсми теркәлгән милли-мәҙәни берекмәләрен берләштерә. Власть органдары менән милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе камиллаштырыуға йүнәлтелгән һөйләшеү алып барыу, Башҡортостанда тыныслыкты һәм татыулыкты һаҡлау уның бурыстарының береһе булып тора.

"Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы советы рәйесе Әхәт Мостафин һөйләүенсә, буласаҡ съездың программаһы киң һәм төрлө.

- Беҙ Ассамблеяның Уставына үҙгәрештәр индерергә телөйбеҙ. Асылда, Советтың бер рәйесе урынына өс рәйестән буласаҡ. Элек улай түгел ине. Улар республикалағы төп өс халыҡтың вәкиле булыр, моғайын, - тип аңлатма бирҙе Әхәт Мостафин.

Съезда Ассамблея Советының яңы составы һайлана. Форумда ҡатнашыусылар Башҡортостандағы бөтә милли-мәҙәни үҙәктәрҙең халыҡ ижады күргәҙмәһен ҡарай ала. Шулай уҡ китаптар һәм мәғариф программалары ла тәҡдим ителә.

# ТАҒЫ БЕР ҠУНАҠХАНА



**Өфөлә 167 урынлыҡ Hilton Garden Inn Ufa Riverside отеле асылды, тип хәбәр итә frontdesk.ru ҡунаҡхана бизнесының махсуслаштырылған порталы. Ул ҡаланың тарихи өләшендә - Конгресс-холл янында урынлашҡан.**

Отелдә бушлай интернет менән ҡулланырға мөмкин, тәүлек әйләнәһенә бизнес-үҙәктәр һәм фитнес залдары эшләй. Эшлекле һөйләшеүҙәр, конференциялар һәм туй тантаналарын ойоштороу өсөн шарттар бар. Быны өсөн ҡунаҡхана комплексында дүрт конференция залы һәм банкет залы йыһазландырылған - уларҙың дөйөм майҙаны 478 квадрат метр тәшкил итә. Отель биләмәһендә ресторан һәм тәүлек әйләнәһенә минимаркет эшләй.

Өфөләге отель - Рәсәйҙәге Hilton Garden Inn ҡунаҡханаларының етенсеһе. Был - KESCO компанияһы менән берлектә ғәмәлгә ашырылған икенсе проект. Hilton Garden Inn бренды донъялағы 600-ҙән ашыу отелде берләштерә.

# БӘЛӘКӘЙ БУЛҺА ЛА...

**Өфөлә бәләкәй метражлы фатирлы йорттар проекты экспертиза үтте. Тиҙҙән төҙөләшкә рөхсәт биреләсәк. Черниковка биҫтәһендәге Ҡулса урамында майҙаны 20 кв.м фатирлы йорттар төҙөлә башлаясаҡ.**

Фатирҙарҙың хаҡы миллион һум самаһы буласаҡ. Льготалы ипотеканы файҙаланғанда тәүге иғанә 200 мең һум тәшкил итәсәк, айлыҡ түләүҙәр 10 мең һумдан артмаясаҡ. Проектты төҙөүселәрҙең береһе - Өфөнөң Заказ биреүсе һәм техник күҙәтеү хеҙмәте. "Ҡала кешеһе" программаһы күҙаллауынса, тиҙҙән Өфөлә ипотеканы йылына 7-8 процент менән алырға мөмкин буласаҡ.

- Ошо көндәрҙә беҙ рәсми рәүештә программаның башланыуын иглан итергә ниәтләйбеҙ. Уның буйынса ипотеканы 10 проценттан кәмерәк итеү мөмкин, йәғни бында 7-8 процент тураһында һүҙ бара. Әлбиттә, был бөтәһенә лә ҡағылмай. Граждандарҙың категориялары, түләү ваҡыты иҫәпкә алынасаҡ. Был Рәсәйҙәге пилот проекты. Барыһы ла килеп сыҡһа, Өфө бөтә илгә билдәле буласаҡ, - тине Владимир Барабаш. - Ошо программа ярҙамында Өфө халҡын торлаҡ менән тәьмин итеү һәм баш ҡаланың, төбәктең төҙөлөш баҙарына ярҙам күрһәтеү мәсьәләләре хәл ителәсәк.

Рәсәйҙә дәүләт булышлығындағы ипотека март урталарынан ғәмәлгә инде. Уның буйынса процент ставкаһы 12 проценттан ашмай, әммә төҙөлөүсе торлаҡҡа ғына льготалы заем алырға мөмкин. Ошо программа өсөн дәүләт 20 миллиард һум аҡса бүлә. Иҫәпләүҙәр буйынса, 230 меңдән ашыу ғаилә процент ставкаһы түбән булған ипотека алыу мөмкинлегенә эйә.

# БЕҘҘЕКЕНЕҢ ХАҠЫ ЮҒАРЫРАҠ

**Башҡортостандың урындағы баҙарында республика етештереүселәренең өлөшө 20 процентҡа кәмене. Был хаҡта Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы етәксеһе Зөлфирә Аҡбашева Эксперт советы ултырышында белдерҙе.**

- Һуңғы мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда инфляция алты процент кимәлендә билдәләнде, балыҡҡа, иткә, ҡош итенә хаҡтар артты, - тип хәбәр итте Зөлфирә Аҡбашева. - Шуның менән бергә магазин кәштәләрендә республика етештереүселәренең продукцияһы 20 процентҡа кәмене. Был тәү сиратта сауҙа ойошмалары сәйәсәтенә, шулай уҡ тауарҙарҙы заказдар ултыршлаштырыу аша килтереүгә бәйле.

Социаль мөһим продукттарға хаҡтарҙы тотороҡландырыу хаҡында һөйләгәндә, Зөлфирә Аҡбашева хаҡты алдан күтәреү һәм артабан уны ошо кимәлдә ҡалдырыу осраҡтары асыҡланған, тип билдәләне. Эксперт советы ултырышында ҡатнашыусылар билдәләүенсә, эмбарго һалыу арҡаһында урындағы баҙарҙа Благовар, Ҡырмыҫҡалы райондарында етештерелгән һөт продукцияһы, йылҡы ите, Бәләбәй сыры һатыла башланы. Ултырышта ҡайнатылмаған һөт баҙары тураһында ла һүҙ барҙы. "Өфө ҡалаһы һөт заводы" директоры Илдар Фәйзуллин хәбәр итеүенсә, "һөттөң һатып алыу хаҡтары 22 һумдан 16 -ға тиклем төштө". Шуға күрә продукцияға хаҡтар 10-15 процентҡа арзанайтылды, әммә был осраҡта ла республика етештереүселәренең продукцияһы Белоруссия продукттарына ҡарағанда ҡиммәтерәк. Шуның менән бергә магазиндарҙа хаҡтар төшмәй. М. Ғафури исемендәге Башҡортостан ҡошсолоҡ комплексына килгәндә, йомортҡаға һәм ҡатнаш аҙыҡҡа хаҡтарҙың 40 процентҡа артыуы сәбәпле, күркә ите 20 процентҡа ҡыйбатланған. Шуға ҡарамаҫтан, уға ихтыяж кәмемәй.

**"Башинформ"**

# Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Депутат Ирек Зарипов Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының Мәғариф, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты ҡарамағындағы спорт буйынса эксперт советы рәйесе итеп һайланды. 14 апрелдә үткән ултырышта совет ағзалары шундай ҡарар ҡабул итте. Александр Семак совет рәйесе урынбаҫары булып ҡала, тип билдәләнеләр республика парламентының матбуғат хеҙмәтендә.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле артистары Рәсәйҙең төньяҡ төбәктәрендәге ҡалалар буйлап гастролдәргә сыҡты. Таныған ижади коллективтың сығыштарын Сорғот, Төмән, Нижневартовск, Екатеринбург, Ҡурған, Силәбе, Миәс, Снежинск тамашасылары ҡарай ала. Гастролдәр 25 апрелгә тиклем дауам итә.

✓Өфөлә БРИКС саммитын юғары кимәлдә үткәреү - властарҙың бурысы, тип билдәләне Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев. Был хаҡта ул Финанс министрлығы коллегияһының киңәйтелгән ултырышында белдерҙе, тип хәбәр итә ТАСС. Дмитрий Медведев шулай уҡ һуңғы йылдағы айырым иҡтисади мәлдәргә туҡталды. Уның билдәләүенсә, Рәсәйҙең яҡын күршеләре менән үҙ-ара килешеп эш итеүе үҫешә, Евразия иҡтисади союзы эшләй башланы, Вьетнам менән иркеле һатыу итеүҙең беренсе зонаһын булдырыу тураһында килешеү әҙерләнә.

✓Башҡортостанда йәшәүселәр көнкүреш техникаһын аҙыраҡ һатып ала башлаған. Башҡортостанстатның 2014 йылдың сентябренән алып декабргә тиклем үткәргән тикшеренеүҙәре ошо хаҡта һөйләй. Билдәләнеүенсә, 2014 йылда энергия ресурстарына хаҡтарҙың кәмеүе һәм санкциялар арҡаһында иҡтисади хәлдең насарайыуы, шуға ярашлы, халыҡтың килеме кәмеүе күҙәтелдә. Был йыл һуңында айырыуса асыҡ сағылды. Ҡулланыусылар баҙарында хаҡтарҙың артыуы һатып алыу һәләтенең кәмеүенә килтерҙе.

✓Башҡортостанда тораҡ пункттарҙың биләмәләрен таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса экологик кампания башланды. Тәүге яҙғы өмәләр 11 апрелдә ойошторолдо. Сарала 320 меңгә яҡын кеше ҡатнашҡан, 11 мең тонна ҡаты ҡалдыҡтар йыйылған. Биләмәләрҙе йәшелләндереү һәм юл япмаларын ремонтлау башҡарыла. Ауырғазы, Бишбүләк һәм Өфө райондарында йәшелләндереү буйынса саралар уҙғарылған. Бөгөнгө көндә 67 мең ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылған, 102 мең квадрат метр самаһы юл япмаһы ремонтланған.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЖУРНАЛИСТАР КҮРГӘНСЕ...

## төҙәтә һалығыҙ!




**Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса ҡала комиссияһының сираттағы ултырышында был һүҙ лейтмотив булып үтте, тиергә лә мөмкин. Сөнки, журналистар хәл-торошҡа йоғонто яһай алмай, әммә уны ҡатмарлаштырырға мөмкин, тигән шаярыу ҡатыш ысынбарлыҡ был һүҙҙәрҙең ике осраҡта ла дөрөҫ булыуын раҫланы.**

Әле күптән түгел генә интернет селтәрендә Киров районының Эшсе хәбәрселәр урамын кемдер шаярып тәржемә итеп эшләгән фотошоп шау-шыу тыуҙырһа, ошо көндәрҙә Зәйнәб Биишеваның һүҙҙәре яҙылған хаталы баннер ярты көн генә эленеп тороуына ҡарамаҫтан, шунда уҡ журналистарҙың күҙенә салынды. Шуға ла Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов ултырышта ҡатнашыусыларға ҡала хужалығының барлыҡ тармаҡтарында ла алтаҡталарҙы һәм башҡа күргәҙмә материалдарҙы эшләгәндә хаталарға юл ҡуймау талабын еткерҙе.

Әлбиттә, баш ҡалала, республиканың башҡа райондары һәм ҡалаларынан айырмалы, был йүнәлештә эш даими һәм планлы рәүештә алып барыла. Ошо ултырыш алдынан да белгестәр коммуналь, торлаҡ хужалыҡтары, транспорт буйынса тикшереүҙәр үткәргән. Уларҙы анализлау шундай һығымтаға этәрә: тәржемә ителгән текстарҙа хаталар булмаһа ла, ул текстарҙы алтаҡталарға күсергән ваҡытта башҡорт хәрефтәрен икенсе хәрефтәр менән алмаштырыу һөҙөмтәһендә хаталар барлыҡҡа килә. Быға, әлбиттә, реклама өсөн яуаплы хеҙмәттә башҡортса белгән белгестәр булмауы сәбәпсе. Ә урынына *а, э, е, h* урынына - инглизсә *н, ҡ* урынына - *к, ө* урынына *о* хәрефен ҡуйыуға ҡағыла. Бындай хаталар тикшереү барышында төшөрөп алынған фотоларҙа ла асыҡ күренде һәм экран аша трансляцияланып, хаталар юҡ, тип әйтергә урын ҡалдырманы.

Ултырышта баш ҡаланың Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы урынбаҫары Сергей Плотников республика законын тормошҡа ашырыу буйынса атҡарылған сараларҙы бәйән итте. Уның белдереүенсә, ойошма телдәр сәйәсәте буйынса бүлек белгестәре менән тығыҙ хеҙмәттәшлектә эшләй һәм алтаҡталарҙы, иҫтәлекле таҡтаташтарҙы эшләтеү һәм урынлаштырыу мотлаҡ рәүештә тикшерелгәндән һуң ғына тормошҡа ашырыла. Төҙөкләндерелгән парктар һәм скверҙар милли колорит һәм символика элементтары менән байытыла. Мәҫәлән, Мәжит Ғафури исемендәге паркта асыҡ китап итеп эшләнгән һәйкәлгә халыҡ шағирының әҫәренән дүрт юллыҡ башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған. Ленин урамындағы аллеяла Өфө атамаһына стилләштерелгән скульптура ҡуйылған. Бындай эштәр артабан да дауам итәсәк.

Баш ҡаланың Транспорт һәм элемтә идаралығы начальнигы Сергей Храмов белдереүенсә, халыҡты транспорт хеҙмәтләндереүе законға ярашлы алып барыла һәм бынан тыш, төрлө милектә булған ҡала автобус маршруттарында даими рәүештә салондағы Транспорт менән файҙаланыу ҡағиҙәләре, милексе, юл хаҡы тураһында мәғлүмәттәрҙе тикшереү буйынса рейдтар үткәрелә. Автобустарҙа һәм электр транспортында туҡталыштар ике телдә иғлан ителә, ҙур байрамдарҙа пассажирҙарҙы ике дәүләт телендә ҡотлау тәжрибәһе индерелә. Сергей Владимирович "Өфө ҡала транспорты" МУПына ҡала маршруттарын хеҙмәтләндереүсе шәхси ойошмаларҙың да текстарҙы башҡорт теленә тәржемә итеүҙе үҙәкләштереп ойоштороуҙы һорап мөрәжәғәт итеүҙәрен ыңғай күренеш тип баһаланы.

Торлаҡ хужалығындағы хәл-торош менән ошо тармаҡ учреждениеһы директоры Раил Мирхәйҙәров таныштырҙы. Ҡала райондарында барлығы 5175 күп фатирлы йорт бар. Төҙөкләндереү ҡағиҙәләренә ярашлы, уларҙың барыһы ла адрес билдәләре менән тәьмин ителгән. 3775 йортта урам атамалары башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған, 842 йортта улар башҡорт, рус, инглиз телдәрендә яҙып урынлаштырылған. Алтаҡталарҙың эскиздары барыһы ла тейешле хеҙмәттәрҙә килешеү үткән.

Сара һуңында Сынтимер Биктимер улы тағы ла бер тапҡыр ултырышта ҡатнашыусы район хакимиәттәре вәкилдәрен, комиссия ағзаларын һәм барлыҡ ҡатнашыусыларҙы хаталарҙы төҙәтеүҙә оперативлыҡ күрһәтергә саҡырҙы, алтаҡталарҙы һәм башҡа мәғлүмәт сығанаҡтарын дәүләт телдәрендә хатаһыҙ яҙыу һәм урынлаштырыу мәсьәләһенә айырыуса иғтибар биреү кәрәклеген билдәләне. Сөнки апрель һуңында Башҡортостан Республикаһы Халыҡтары ассамблеяһының III съезы, майҙа Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы, йәйгеһен 14 ил башлығы ҡатнашлығында ШОС һәм БРИКС саммиттары ултырышы баш ҡалала уҙасаҡ, һәм Өфөбөҙ үҙен инфраструктура, ҡунаҡсыллыҡ буйынса ғына түгел, телдәр сәйәсәте буйынса ла лайыҡлы күрһәтергә тейеш.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ



# КЕНИЯ - АЛЫҪ,

## әммә хәүефе яҡын

**Апрель башында Кенияның Гарисса ҡалаһындағы университетта террористик һөжүм һөҙөмтәһендә йөҙҙән ашыу кешенең ғүмере өҙөлдө, тиҫтәләгән кеше тән йәрәхәте алды. Шәриғәт ҡанундарын белмәгәндәр йәки насар белгәндәр сомали төркөмөнә ҡараған "Хәрәкәт-аш-Шабаб" террористары ҡулынан һәләк булды. Әгәр ҙә боевиктар һаны дүртәү түгел, ә күпкә артығыраҡ булһа, был ҡурҡыныс упҡындан ҡотолған 500-ләп кешенең дә тере ҡалыуы шикле булыр ине.**

Гариссалағы террористик акт бөтә донъяны тетрәтте, ләкин ул беренсе ҡан ҡойош түгел. Быға тиклем дә Кенияла йөҙәрләгән кешенең ғүмерен ҡыйған ошондай уҡ терактар булды. Уларҙың барыһы ла Сомалиҙың көньяҡ-көнбайышында төпләнеп, 2012 йылда Аль-Каидаға тоғролоҡта ант иткән һәм үҙ контролен Кения менән Эфиопияның сигенә тиклем йәйелдергән аш-Шабаб төркөмөнөң "эше". Үҙған йылдың сентябрендә аш-Шабаб террористик төркөмөнөң башлығы Годаненың юҡ ителеүен Кения һәм Америка хөкүмәте оло еңеү кеүек ҡабул итте, йәнәһе, "кеше лә юҡ - проблема ла юҡ". Ләкин артабанғы ваҡиғалар был аҙымдың Сомали исламистарын тик әүҙемләштереүгә генә килтереүен асыҡ күрһәтте. Террористар бигерәк тә Кения территорияһында автобустарға, ҡалаларға, таш сығарыу урындарына, баҙарҙарға йыш һөжүм итә башланы. Уларҙың барыһы ла бер үк схемаға ярашлы башҡарыла - Ислам динендә булмағандар йәки шәриғәт ҡанундарын насар белгәндәрҙе ҡырыу. Кения халҡының 90 проценты христиандар икәнен күҙ уңында тотҡанда, артабан да бында террористик акттарҙың йыш буласағын көтөргә ҡала. Әлегәсә ил хөкүмәте үҙенең эшмәкәрлеге менән террористик төркөм алдында көсһөҙ икәнлеген күрһәтте. Хатта АҠШ һәм башҡа илдәрҙең хәрби ярҙамы менән дә ағыулы бәшмәк кеүек киң йәйелгән аш-Шабабтың ҡанлы эшмәкәрлеген туҡтатыу мөмкинлегенә эйә түгеллеген асыҡ билдәләүсе факттарҙы инҡар итеп булмай.

Әйткәндәй, Кенияла ғына түгел, ә бөтә Африка илдәрендә лә тиерлек барған террористик акттар бөтә донъя яңылыҡтарында киң яҡтыртылһа ла, европалыларҙа ниндәй ҙә булһа оло хәүеф тыуҙырмай. Әйтерһең, ғинуарҙа Нигерияның Бага ҡалаһында "Боко харам" террористик ойошма тарафынан ойошторолған массалы ҡырылыш та, Ливияла ИГИЛ (Ирак һәм Леванта Ислам дәүләте) ойошмаһы ағзаларының төрлө илдәрҙең граждандарын үлем язаһына тарттырыуҙары ла, Йеменды бомбаға тотоу ҙа икенсе Йыһанда бара. Ә үҙҙәрен тыныс һанаған илдәрҙе бөтөнләй башҡа - Евровидение конкурсында толерант тауыш биреү, футбол, хоккей һәм башҡа спорттағы уңышһыҙлыҡтар һәм башҡа мәсьәләләр борсой. Улар күҙлегенән сығып ҡарағанда, әлеге ваҡытта ошоларҙан да мөһимерәк ваҡиғалар юҡ. Тик саҡ ҡына күҙҙәрҙе асып ҡараһаҡ, алыҫта барған ваҡиғаларҙың ни тиклем дәһшәтле һәм ҡурҡыныс икәнлеген аңларға була. Европалылар мылтыҡ көбәге аҫтында яуап тота башлауға күпме ваҡыт үтер? Бөтөн кешелеккә хәүеф менән янаған терроризм менән көрәште берҙәм булып, тиҙ үк башлау кәрәклеген аңлағансы һуң булмаҫмы? Ошо һорауҙарға тиҙ арала яуап табыу һәм тейешле аҙымдарҙы эшләү мөһим, юғиһә, кәрәкле ваҡыттың үтеп китеүе лә ихтимал.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бөйөрҙәге таш

❖ Бөйөрҙә таш булһа, һуттар файҙалы. Көнөнә 3 мәртәбә ашар алдынан берәр стакан ҡайын һыуы эсегеҙ.

❖ 4-6 ай буйына ашар алдынан көнөнә 3-4 мәртәбә кишер һуты эсеү файҙалы.

❖ 3 аҙна буйы ашар алдынан яртышар стакан ҡабыҡлы картуф бешкән һыуҙы эсеү ҙә сихәтле.

❖ 2 аҙна буйына көнөнә 3-4 мәртәбә бер лимон һутына һыу йәки кишер, сөгөлдөр, ҡыяр һуты ҡушып эсеү ҙә файҙа бирә.

### Үт ҡыуҙырыу

❖ Үт ҡыуығына үт һәм ваҡ таштар тығылған, тигән диагноз ҡуйһалар, 500 мл араҡыға сусҡаның 1 ҡалаҡ үт шыйыҡсаһын ҡушырға ла, һыуытҡыста өс көн тоторға. Аҙаҡ марля аша һөҙөргә, иртәнсәк һәм кисен ашарҙан 30 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә, артынан һыу эсергә, берәй нәмә ашарға ярамай. Бер нисә көндән йыйылған үт сығыр, бауырҙа еңеллек тойолор, үҙәгегеҙ ҙә көймәй башлар.

### Ҡояш нуры

❖ Ҡояшлы көндәрҙә тышта күберәк булығыҙ һәм Е витамины ҡабул итегеҙ. Был сара шәкәр диабеты ауырыуына кәртә ҡуя. Тирем ныҡ яна, тип, ҡояштан ышыҡланыусылар һәм витаминдар ашамаусылар шәкәр сиренә генә түгел, башҡа ауырыуҙарға ла тиҙ бирешә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

### Стенокардия

❖Тигеҙ өлөштә киптерелгән гөләйемеш менән энәлек емештәре алырға. 7 ҡалаҡ емешкә 2 л ҡайнар һыу ҡойоп, урап, 1 тәүлек төнәтергә. Һөҙөргә һәм яҡшы итеп ябып, һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә 3 тапҡыр сәй урынына 1-әр стакан эсергә. Дауаланыу курсы - 2-3 аҙна.

### Йүткереү

❖Балаларҙы ҡоро йүткереүҙән дауалау өсөн кишер һуты һығып, уға ирет елгән шәкәр ҡушырға. Тәмле лә, шифалы ла дарыу килеп сыға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *"Тау башында балҡып торған ҡалаға алып барабыҙ", - тигәс тә, әкиәттәрҙә генә һөйләнгән ҡаланы күҙ алдыма килтерҙем. Күргем килде. Ағайым күпме иламаһын, бер төркөм балаларҙы арбаларға ултыртып, ауылыбыҙҙан алып киттеләр.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠАРҒА - ИЗГЕ ҠОШ

**Боронғо башҡорттарҙың дини-мифологик ҡараштарында ҡарға культы үҙенсәлекле урын алып тора. Башҡорттар үҙ мифтары һәм легендаларында кеше һәм ҡарға араһында бөтөнләй айырмалыҡ күрһәтмәй.**

Был тема яҡшы өйрәнелгән, әммә белгестәр араһында изге ҡоштоң ҡарға, ҡара ҡарға, әллә ҡоҙғон булыуы хаҡында бәхәстәр бар. Минеңсә, бында һүҙ ҡарға/ҡоҙғон тураһында бара, ә улар икеһе лә бер тамырҙан яһалған: ҡар+ға/ҡоҙ+ғон. Һәм улар икеһе лә "ҡарға" мәғәнәһен белдерә. Башҡа төрки телдәрендәге кеүек, башҡорт телендә лә а-о-у һуҙынҡыларының һәм р-з-ҙ тартынҡыларының сиратлашыуы ғәҙәти күренеш.

"Алтын ҡауырһын", "Ала ҡарға хан", "Ҡоҙғондар батшаһы" әкиәттәрендә ҡарғалар кешегә хас сифаттарға эйә. "Урал батыр" эпосында йәнлектәр һәм ҡоштар донъяһында ҡоҙғон иң аҡыллы ҡош булып сыға: үлемде табып, уны үлтереү теләге тураһында әйткәс, Урал батырға ярҙам итеүҙән ул ғына баш тарта. Сөнки ҡоҙғон бының тәбиғәт ҡанундарын боҙоу икәнлеген яҡшы белә.

Ҡарға менән кешене тиңләштереү башҡорт теле лексикаһында ла күренә. "Бала-саға" тигән һүҙҙең икенсе элементы - "саға"ның семантикаһы күптән онотолған. Ул күплекте белдереүсе булараҡ ҡына ҡарала. Билдәле телсе Дмитриев фекеренсә, төрки телдәрендә "саға" айырым мәғәнә белдереүсе һүҙ булған. Сығатай телендә ул "ҡарға балаһы", төркмән телендә "бала" тигәнде аңлата. Тәү варианттарында "бала-саға" һүҙе "бала-ҡарға балаһы" тигәнде аңлатыуы ла бар. Йәғни, ҡасандыр бала "ҡарға балаһы" тигән төшөнсә менән йөрөтөлгән. "Ун ике һорау" тигән әкиәттә кеше менән ҡарға ҡан туған тип таныла, кеше кеүек үк, ҡарға ла Әҙәм балаһы, тик ул үҙенең ялҡаулығы арҡаһында кеше ҡиәфәтен юғалтҡан. Баймаҡ һәм Әбйәлил райондарында киң таралған "Бала ҡарға" легендаһында һөйләнелеүенсә, ҡасандыр башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында ырыу-ара һуғыштар мәлендә ир менән ҡатынды дошмандар әсиргә ала. Ҡулындағы балаһын ҡатын ҡарғаларҙың ояһына һалып китә. Күпмелер ваҡыттан һуң улар дошмандарҙан ҡаса һәм ҡайтышлай балаларының һөйәктәрен күмеп булһа ла китеү маҡсатынан ҡарға ояһына килә. Ҡараһалар, балалары тере булып сыға:

Балаҡайым, ғәзизкәйем,
Булғанһың бит бала ҡарға!..

Ҡарға менән кешеләр бер сығышлы булғас, ҡайһы бер кешеләр ҡарғанан килеп сыҡҡан, тигән фекерҙәр ырыу араларының атамаларында күренә. Көнсығыш табын ырыуының күбәләк ырыуында ҡарға араһы бар. Был төркөмгә ҡараған кешеләр үҙҙәренең ырыуының мифик тәүбабаһы итеп ҡарғаны таный. Кузеев фекеренсә, табындарҙың - кәлсер, меңлеләрҙең - ил-күл-мен, күл-ил-мен, меңлеләрҙең һәм ҡыуаҡандарҙың - ҡыркүлә, меңлеләрҙән аҙнай-ил-күлмең, ҡуңҡас-ил-күл-мең һәм илсекәй-ил-күл-мең аралары ла ҡарға менән бәйле.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ЯҢЫ РУБРИКА: "ҺУҒЫШ ЙЫЛДАРЫ БАЛАЛАРЫ"

# АУЫЛЫБЫҘҘАН АЙЫРЫП...

## балалар йортона алып киттеләр




**Һуғыш башланып, бер ай ҙа өс көн үткәс тыуғанмын. Бында яҙғандарым - дүрт йәш тирәһендәге бала хәтирәһе.**

Еңеү яуланғас, ауылдарҙан ауылдарға йөрөп, апайҙар иң кескәй етемдәрҙе йыйырға тип, ауылыбыҙға килгән. Иҫемдә, ағайым минең ҡулымды ныҡ тотоп: "Һеңлемде алып китмәгеҙ!" - тип ҡысҡырып илай, ә мин икеләнәм. Ағайымды ла йәлләйем, китәһем дә килә. Сөнки беҙҙе алып китергә килгән апай: "Тау башында балҡып торған ҡалаға алып барабыҙ", - тигәс тә, әкиәттәрҙә генә һөйләнгән ҡаланы күҙ алдыма килтерҙем. Күргем килде. Ағайым күпме иламаһын, бер төркөм балаларҙы арбаларға ултыртып, ауылыбыҙҙан алып киттеләр. Тәүҙә бер арба тулы, бара торғас, ике арба тулы, һуңынан бер йөк машинаһы тулы балалар йыйылып киттек. Кис еткәс, бер өйҙә ҡунырға туҡтаныҡ. Апайҙар беҙҙе ҙур түңәрәктәргә ултыртып, һәр төркөмгә берәр ҙур һауыт бутҡа алып килделәр. Һәр бала бер ҡалаҡ бутҡаны ҡаба ла, һауытты янында ултырған балаға бирә. Ул туҫтаҡ түңәрәк буйлап йөрөй, әллә күпме йыйтыр күҙҙәр уның артынан күҙәтә. Ҡайҙа, нисек ятып йоҡлағанбыҙҙыр, иҫтә ҡалмаған, һуңынан бер матур бүлмәгә барҙыҡ тип кенә иҫләйем. Әле аңлайым, бүлмә тигәнебеҙ поездың вагоны булған. Ул бүлмәлә бик ныҡ һыуһаһам да, бер кемгә лә әйтмәүем, түҙеүем иҫтә. Поездан төшкәс, "ҡайнатылған һыу" һатып тороусы апай һәр беребеҙгә бер-ике йотом һыу эсерҙе. Балалар йортонда беҙҙе теҙеп баҫтырҙылар ҙа, кемдең ниндәй кейеме юҡлығын яҙып алдылар, һаулығыбыҙҙы тикшерҙеләр, төрлө дауаханаларға таратырға, тинеләр. Икенсе көн иртән иртүк уянып, беҙҙе бында алып килгән ауыл апайҙарын көттөк. Уларға бик күнегеп, яҡын күреп әсәнеп киткәйнек. Ауыл апайҙары беҙҙән күҙ йәштәребеҙҙе күрмәҫ өсөн: "Таң атҡас, иртән килербеҙ", - тип, беҙҙе алдап ҡалдырып ҡайтып киткән булып сыҡты. Икенсе апайҙарҙы күреп, тәҙрәләрҙән урамға ҡарап илаштыҡ.

Әлбиттә, яңы апайҙарға ла бик тиҙ күнегеп киттек. Минә тимерәү йоҡҡан икән. Дауаханала ярты йылға яҡын "таҡыр баш" булып дауаланып яттым, тәүге тапҡыр ҙур көҙгөлә үҙемде күреп, сағылышымды берәй шаян ҡыҙыҡай икән, тип ҡабул иттем һәм уның менән йүгерешеп уйнаным. Тик ул мин үҙем икәнен аңлағас, бына мин ниндәймен икән, тип иғтибар менән ҡарап йылмайып, көҙгө алдында байтаҡ баҫып торҙом. Һауыҡҡас, ҡабат Өфөнөң 1-се һанлы балалар йортона алып ҡайттылар. Ҡылысбай исемле малай (минән саҡ ҡына оло) мине коридорҙа күреп: "Һин Бөрйән районынан икәнеңде онотма. Әгәр берәйһе рәнйетһә, миңә әйтерһең, йәме?" - тине.

Ауылымдан алып китеүҙәрен ауыр кисермәнем, сөнки ул саҡта ағайым менән Бөрйән районының Байназар балалар йортонда тәрбиәләнә инек инде. Әсәйебеҙ "Һуҡыр Ҡәнифә" бер тапҡыр ғына килде. Ул тома һуҡыр булғас, етәкләп алып килеүсе кәрәк бит. Сәсемдән һыйпаны ла: "Һеҙҙе ашаталар бит, миңә бер телем икмәк алып килһәңсе", - тип үтенде. Ашхананан минә тәғәйен икмәктең яртыһын алып сыҡҡайным да ул, тик әсәйем ҡайтып киткәйне инде. Ә Өфөләге балалар йортонда йоҡларға ятыр алдынан мин йыш ҡына: "Балалар, ә минең ауылым бар. Ауылымда кескәй генә өйөм бар. Беҙҙең әтәсебеҙ, тыуығыбыҙ, себештәребеҙ бар. Әтәс ағайымдыҡы, тауыҡ әсәйемдеке, ә һапһары себештәр минеке", - тип маҡтанып һөйләйем. Мин тәрбиәләнгән төркөмдә Бөрйәндән бер бала ла юҡ ине. Тик бер көндө бер бала: "Алдаша ул, гел шул әкиәтен һөйләй. Әгәр һинең берәй кемең булһа, килерҙәр ине", - тип әйткәс, үҙем дә уйға ҡалдым. Ысын, әллә ул ауылды төшөмдә күрҙемме икән, тип икеләндем. Томан эсендә генә ҡалған ауылымды бөтөн һөйләмәнем. Унынсы синыфты тамамлағас, ауылымды эҙләп таптым шулай ҙа. Кескәй генә ағас өйөмдө лә күрҙем...

Аптырап уҡыйһығыҙҙыр. Эйе, 70 йыл элек булған ваҡиға шулай өҙөк-өҙөк көйө генә һаҡланған шул хәтерҙә. Ошо ғына инде һуғыш йылдарында тыуған баланың яҙмаһы. Ҡалғаны ҡәҙимгесә: үҫтем, уҡыным, эшләнем. Ә әле саф һауалы, тып-тын кисле ауылым һағындырып хәтеремдә балҡып сыҡһа, тамаҡҡа төйөр тығыла, күҙҙәр еүешләнә. Ауылыбыҙҙан айырып алып киттеләр беҙҙе... Тик ғүмерем буйы аслыҡтан, ауырыуҙарҙан ҡурсалап, һөйөп үҫтергән Ватаныбыҙға, балалар йортона рәхмәт хистәре йыуата күңелемде. Балалар йортона бергә юлланған ҡайһы бер Бөрйән балаларының исемдәре әле лә иҫемдә: Ҡылысбай, Рәхимйән, Азат, Гөлфариза, Мәһинур, Фәризә, Ғилман, Мәрзиә... Һуғыш йылдарында тыуған балалар, һеҙҙе Бөйөк Еңеү байрамы менән ҡотлайым!

Был хәтирәмде әлеге балалар, йәштәр уҡыһындар ҙа, тыныс, етеш тормоштоң ҡәҙерен белеп йәшәһендәр, тип яҙырға булдым.

**Фәүзиә ЯХИНА-УСМАНОВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "АЛТМЫШ ЙЫЛДАН ҺУҢ...

## тәүге тапҡыр диктант яҙҙым"

**(Башы 1-се биттә).**

Тел - ул халыҡ рухының тышҡы билдәһе, сөнки тел - ул рух, ә рух - ул тел, тигән бик тапҡыр һүҙҙәр бар. Телем, тип ҡысҡырып йөрөү өсөн рух кәрәкмәй, әммә рухлы кеше бындай саранан ситтә ятып ҡала ла алмай. Башҡорт дәүләт университеты ректоры Николай Данилович Морозкин да диктант яҙырға йыйылыусыларға телгә булған ҡыҙыҡһыныуҙары өсөн оло рәхмәтен белдереп, тыуған ил менән туған тел төшөнсәләре айырылғыһыҙ булыуын, тел булғанда ғына ил буласағын хәтерҙәргә төшөрҙө. Беренсе тапҡыр үткәрелеүенә ҡарамаҫтан, БДУ-ла ғына ике ҙур аудитория кеше йыйылды. Тексты Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшев уҡыуы ла сараға тантаналы көйөф өҫтәне.

Билдәле фән әһелдәре, уҡытыусылар, журналистар менән бер рәттән, диктант яҙырға теләүселәр араһында студенттар ҙа, уҡыусылар ҙа күп булды. Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусыһы Нәркәс Ишембәтова әйтеүенсә, башҡорт телен яҡшы белгәс, диктант яҙыу бер ауырлыҡ та тыуҙырмаған. Иң мөһиме, бында һәр кем үҙенең телгә буйһонса килгәйне, кемгәләр белемен һынап ҡарау ҡыҙыҡ булһа, кемдер уны башҡорт теленә ихтирамын күрһәтергә мөмкинлек, тип таныны. Бар ғүмерен нефть өлкәһендә эшләүгә арнаған Фәнис ағай Исхаҡов, мәҫәлән, аҙаҡҡы



тапҡыр диктантты 60 йыл элек яҙған. "1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында Сажиҙә Хәмәтйәр ҡыҙы Зайлалова, Ләйлә Сабир ҡыҙы Ваһаповалар биргән белем хәтеремдәме икәнен һынап ҡарарға уйлағайным, бер нәмә лә онотолмай икән. Диктантты яҙҙым былай, өтөрөн дә, өндәүен дә ҡуйҙым", - тип шаярта Фәнис ағай. Башҡорт баҫмаларын, шул иҫәптән "Киске Өфө"нө рәхәтләнеп уҡыған кеше диктантты насар яҙ-

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында хәрби бәрелештәр барған райондарҙан һәм ошо ҡурҡыныс янаған төбәктәрҙән граждандарҙы, сәнәғәт, мәҙәниәт ойошмаларын тылға күсереү әүҙем ойошторола. Һуғыш менән бәйле ауыр сәйәси, иҡтисади, социаль хәл булыуға ҡарамаҫтан, эвакуация миллионлаған кешеләрҙең ғүмерен ҡотҡара, стратегик әһәмиәтле завод-фабрикаларҙы фашистар ҡулына эләгеүҙән һаҡлап ҡала һәм һуғышта еңеүҙе тәьмин итә. Башҡортостан да һуғыш йылдарында эвакуацияланған халыҡты ҡабул итеүсе төбәктәрҙең береһенә әйләнә. Меңәрләгән ҡасаҡ ҡала-ауылдарға урынлаштырыла, йәшәү шарттары ауыр булыуға ҡарамаҫтан, үҙ ихтыяждарынан тыш йортһоҙ тороп ҡалғандар тыуған яҡтарынан меңәрләгән саҡрымда ваҡытлыса төйәк таба, кемдәрелер һуғыш бөткәс тә тороп ҡала. Республиканың бәләкәй ҡалаларында эвакуацияланғандарҙы ҡабул итеү нисек ойошторолоуы тураһында тарих фәндәре кандидаты Илфат Зәки ул СӘМСИТДИНОВ һөйләй.**

# БӨЙӨК КҮСЕНЕҮ,



## йәғни һуғыш йылдарында республикаға эвакуацияланыусылар тураһында

Һуғыштың тәүге көндәрендә үк Совет власы алдында ҡалҡҡан төп мәсьәләләрҙең береһе фронт һыҙығында ҡалған кешеләрҙе тылға күсереү була. Эвакуация нигеҙенә кешеләрҙе физик юҡ итеүҙән һаҡлау ғына түгел, ә уларҙы яңы ерҙәрҙә урынлаштырыу, өлкән йәштәгеләрҙе иҡтисад һәм фронт маҡсаттарында ҡулланыуҙы ойоштороу ҙа була. Был эвакуация, ауыр шарттарҙа һәм ҡыҫҡа ваҡытта үткәрелгәнен иҫәпкә алғанда, кешелек тарихында масштабтары буйынса донъяла тиңе булмаған хәрби сара иҫәпләнә.

СССР Совнаркомы Үҙәк комитетының 1941 йылдың 27 июне менән билдәләнгән ҡарарында эвакуацияның бурыстары һәм иң тәүҙә ошо сараға эләгергә тейешле объекттарҙың исемлеге ҡабул ителә. Тылға, дәүләттең көнсығышына иң тәүҙә квалификациялы эшсе һәм хеҙмәткәр кадрҙар, оло йәштәге кешеләр, балалы ҡатындар, балалар учреждениелары, сәнәғәт ҡорамалдары, станок һәм машиналар, төҫлө металл, яғыулыҡ, икмәк һәм дәүләт әһәмиәтендәге башҡа матди һәм рухи ҡиммәттәр күсерелергә тейеш була. Эвакуация буйынса Советтың Үҙәк мәғлүмәт бюроһы мәғлүмәттәренә ярашлы, хәүеф аҫтында булған зонанан тылға йәмғеһе 17 миллион кеше күсерелә. Был, ысынлап та, ҙур һан. Эш күсереү менән генә тамамланмай, уларҙы яңы территорияларҙа урынлаштырырға кәрәк була, был тағы ла ҙурыраҡ көс һәм яуаплылыҡ талап итә. Һуғыш йылдарында беҙҙең илебеҙ граждандарҙы эвакуациялауҙа уникаль тәжрибә туплай.

Уралға булған эвакуация шартлы рәүештә ике этапҡа бүленә. Уның беренсе этабы 1941 йылдың йәйенә һәм көҙөнә тура килһә, икенсе этабы 1942 йылдың йәйендә һәм көҙөндә башҡарыла. Беренсе этапта кешеләр Рәсәйҙең үҙәк өлкәләренән, шул иҫәптән Мәскәүҙән, илдең төньяҡ-көнбайыш райондарынан, Украинанан, Ҡырымдан, Балтика буйы илдәренән, Беларустан күсерелә. Икенсе этапта халыҡ Ленинградтан, Краснодар, Ставрополье крайҙарынан, Төньяҡ Кавказдың автономиялы республикаларынан, Воронеж, Сталинград өлкәләренән эвакуациялана.

Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән Башҡорт АССР-ы илдең төп тыл төбәктәренең береһенә әйләнә. Һуғыштың тәүге айҙарында уҡ бында эваукацияланған халыҡ күсерелә башлай. 1941 йылдың аҙағына республика территорияһына 278 мең кеше эвакуациялана, уларҙың 104 меңе ҡалаларға урынлаштырыла. Был урбанизация кимәле юғары булмаған Башҡортостандың дөйөм ҡала халҡы контингентының тиҙ арала артыуына килтерә (1941 йылдың башында Башҡортостан ҡалаларында 604 мең кеше йәшәгән булһа, 1943 йылдың башына уларҙың һаны 811 мең кешегә етә).

Эвакуацияланғандарҙың төп өлөшөн урыҫ телле халыҡ тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер диаспоралар ҙа күсерелә. Әйтергә кәрәк, СССР етәкселеге тарафынан һуғыш алдынан һәм һуғыш йылдарында алып барылған иҡтисади сәйәсәт, шулай уҡ дәүләттең үҙ халҡына ҡаршы ҡулланған төрлө репрессив саралары ла халыҡтың тиҙ күсеneүенә булышлыҡ итә, ҡайһы бер халыҡ вәкилдәренең башҡа төбәктәрҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда, артыуына йоғонто яһай. Башҡортостанға ошо йылдарҙа юҡҡа сығарылған Волга буйындағы Немец АССР-ынан - немецтар, Ҡырым АССР-ынан - гректар, Көнбайыш Украинан һәм Көнбайыш Беларустан поляктар килтерелә.

Һуғыш барған төбәктәрҙән килгән кешеләрҙе урынлаштырыу мәсьәләһе эвакуацияланған халыҡты ҡабул итеүселәр өсөн тәүге бурыс булып тора. Был үтә ҡатмарлы проблемаға әйләнә. Сәбәптәре түбәндәгесә була. Беренсенән, һуғыш ваҡытында торлаҡ төҙөлөшө билдәле сәбәптәр арҡаһында ҡырҡа кәмей. Икенсенән, торлаҡ етмәү мәсьәләһе Урал төбәгендә һуғышҡа тиклем дә күҙәтелгән була. Был проблема Башҡортостанда ла киҫкен тора. Йәшәү урындары етешмәү арҡаһында Башҡорт АССР-ының халыҡ комиссарҙары Советы 1941 йылдың 17 ноябренән булған фарманында, ҡала һәм районадарҙың башҡарма комитеттарына түбәндәге положениеларҙан сығып эш итергә саҡыра. Был положениеға ярашлы, урындағы советтарға һәм ойошмаларға ҡараған биналарҙың йәшәргә яраҡлы булған һәр квадрат метры ҡасаҡтарға бирелергә тейеш була. Был биналар ҡала һәм район коммуналь хужалыҡтары тарафынан иҫәпкә алына, улар йәшәү өсөн ордерҙар тапшырыу менән шөғөлләнә башлай. Торлаҡ ордерҙары йә айырым бүлмәгә, бер нисә кешегә, ғаиләгә бер юлы, йә хужалар менән уртаҡ йәшәү өсөн бирелә. Шулай уҡ ордерҙа нисә кеше йәшәйәсәге, бирелгән бүлмәнең, мөйөштөң майҙаны күрһәтелә. Ордерһыҙ урынлашҡандарҙы ҡыуып сығарыу ҡарала. Шулай уҡ был ҡарарҙа фатир өсөн түләүҙәрҙең күләме билдәләнә.

Ошо ҡарар ҡабул ителгәндән һуң иң башта йәшәү өсөн ҡулай булған майҙансыҡтар билдәләнә. Ҡайһы бер ойошмалар ҡалаларҙан ауылдарға, йәки бәләкәйерәк майҙанлы биналарға күсерелә. Шулай ҙа була, әгәр ҙә предприятие ҡаланан ситкә күсерелһә, унда эшләгән кешеләр ҙә уның менән бергә күсергә тейеш була. Күсенергә теләмәүселәрҙе язаға тарттырыу ҡарала. Кешеләр йәшәү өсөн тәғәйенләмәгән биналарға, мәҙәни-мәғариф учреждениеларына ҡараған йорттарға урынлаштырыла. 1941 йылдың 1 авгусына Башҡортостанда эвакуацияланғандарҙы урынлаштырыу маҡсатында 82 мәктәптең бинаһы алына.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

---

май инде ул! Өфөлә йәшәүсе Сәбилә Шәйбәкова ла 60 элек мәктәпте тамамлаған. Телевизорҙан ишетеп ҡалғас та, йүгереп килеп еткән апай тикшерелеп, баһа ҡуйылған диктантын үҙе килеп алырға ниәтләнә.

"Тәүге тапҡыр үткәрелгән башҡорт теленән төбәк диктантына кеше килерме, юҡмы, тип, бер аҙ борсолғайныҡ башта. БДУ-ла ғына сама менән 500-гә яҡын кеше булды. Быйыл булған етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алып, киләһе йылдарҙа ла был эште дауам итәсәкбеҙ. Бөгөн иһә диктант яҙыусылар араһында йәштәрҙең күберәк булыуы - уларҙа туған телгә булған һөйөүе һәм ихтирамы итеп ҡабул итәм", - тине ойоштороу комиссияһы ағзаларының береһе, филология фәндәре докторы, профессор Ишмөхәмәт Ғилметдин улы Ғәләүетдинов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, "Башҡорт телендә һөйләшәм, башҡорт телендә яҙам" тигән девиз аҫтында үткән төбәк диктанттың төп маҡсаты белем һынауҙан бигерәк, телгә, уның көнүҙәк мәсьәләләренә иғтибар йүнәлтеү ине. Кемдер: "Кемгә кәрәк ул һеҙҙең телегеҙ", - тигәндә: "Беҙгә, ошонда йыйылған меңәрләгән кешегә", - тип яуап биреү өсөн генә булһа ла кәрәк ине был сара. Шуға ла унда дәүләт эшмәкәрҙәре, етәкселәр, яҙыусылар, үҙ һөнәрендә төрлө юғары дәүләт наградаларына лайыҡ булыусылар ҙа булһа, ул күпкә дәрәжәлерәк үтер ине. Һеҙҙең абруйығыҙ телебеҙҙең дә абруйын күтәрә, шуға ла киләһе йылда был йәһәттән үҙгәрештәр булыр, тип ышанайыҡ. Сөнки нимә генә тимәһендәр, туған телдә һөйләшеү - ул рухлы булыуҙың күрһәткесе. Ә шулай ҙа, дөйөм алғанда, башҡорт теленән региональ диктант бик юғары кимәлдә үтте. Хәҙер баһаларҙы ғына көтөргә ҡала.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Имселәрҙән тыш, ауырыуҙарҙы дауалау менән муллалар ҙа шөғөлләнгән. Уларҙың алымы имселәрҙекенән бик аҙ айырылған: ауырыуҙарҙы өшкөрөп, Ҡөрьән сүрәләре уҡып, Ҡөрьән аяттары яҙылған һауыттан һыу эсереп дауалағандар. Айырым осраҡтарҙа, өйҙә ауыр сирле булғанда, ҡорбан салғандар. Бик йыш ул һарыҡ булған. Уның тиреһен ҡорбанды салыусы муллаға биргәндәр, итен саҡырылыусылар ашаған, бары тик ауырыу үҙе генә ауыҙ ҙа итмәгән. Башҡорттар ҡорбанды ауырыу исеменән генә салмаған, Ҡорбан байрамында улар Аллаһҡа бик күп ҡорбан килтергән. Бынан тыш, мәжүси нигеҙле ҡорбан да салынған. И. И. Георги белдереүенсә, башҡорттар "берәй байрам ваҡытында малды үлтереп, ҡаштаҡҡа ҡояш аҫтына бешкән ит һалып, мәжүси шамандар кеүек, уға табынғандар". Пермь башҡорттары тураһында Н. С. Попов "уларҙың ғөрөфғәҙәттәре араһында мәжүсилек һәм шаманлыҡ менән оҡшашлыҡ бар" тип яҙа. Шәхсән миңә Шайтан-Көҙәй дачаһы башҡорттарын ямғыр теләп, ҡырҙа быҙауҙы ҡорбан итеп салыуҙары билдәле. Ҡорбан салыуҙа мотлаҡ мулла ҡатнашҡан. Бындай ҡорбан салыуҙар - теләк - Башҡортостандың башҡа урындарында ла атҡарыла.

Күҙ тейеү хаҡында ла бер нисә һүҙ әйтергә кәрәк. Күҙ тейеүгә бигерәк тә балалар дусар була, шуға күрә уларҙың баш кейеменә - малайҙарҙың түбәтәйенә аҡ ҡаҙ йөнө, ялтыр төймәләр, бик йыш ҡортбаш тегеп ҡуялар. Насар күҙ ҡортбашҡа тейеп, шунда уҡ үҙенең көсөн юғалта, тигәндәр. Кешеләргә генә түгел, хайуандарға ла, ағастарға ла күҙ тейә. Күҙ теймәһен өсөн малдарҙың ҡойроғона (атарҙың ялына) сағыу төҫтәге туҡымалар үрелә. Шулай уҡ туҡыма киҫәген солоҡҡа ла элгәндәр, бынан тыш уларҙың аҫҡы өлөшөн сағыу итеп буяғандар.

Бер атыуҙа ике ҡошҡа тейгән йәҙрәнең мөғжизәле үҙенсәлеге бар тип һаналған һәм уның ярсыҡтарын түлһеҙ ҡатындар ашарға тейеш булған. Ҡоштарҙың, бигерәк тә һыйырҙың тырнағынан ҡырып алынған мөгөҙсә лә шундай тәьҫиргә эйә тип билдәләнгән.

Атап үтелгән алымдарҙан тыш, башҡорттар ауырыуҙы дауалағанда бай булмаһа ла үҙ халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт иткән. Биҙгәк ваҡытында башҡорттар уҫаҡ ҡайыры йәки әрем төнәтмәһе эскән. Үпкә сиренән ҡымыҙ менән сарсапариль төнәтмәһен эскән. Сиҡан сыҡһа, уға һарыҡ тиҙәге һалып бәйләп ҡуйғандар, ул һытылып, эрен аҡҡас, яраны сысҡан тиреһе ябып бәйләгәндәр. Әгәр яра оҙаҡ уңалмаһа, уға ҡоро эремсек һалғандар.

Себер сей яраһы менән ауырығанда яңы ғына һуйылған кәзә бәрәсенең үпкәһен һалып дауалағандар. Ниндәйҙер яра барлыҡҡа килһә, ҡаҙанда тиле орлоҡ ҡайнатҡандар, һуңынан уға шул уҡ кимәлдә киндер орлоғо, бер аҙ ағастың тик төньяҡ өлөшөнән алынған ҡарағас ҡайырыһы һалғандар. Барыһын бергә ҡайнатҡас, ауырыу урынды быу ситкә сыҡмаҫлыҡ һәм һыу һыуынмаҫлыҡ итеп урап, ярты сәғәт ошо ҡайнатманың быуы өҫтөндә тотҡандар. Аттарҙың һәм һыйырҙарҙың иҙелмә яраларын, улар ҡортламаһын өсөн, аҡһырғаҡ тамыры менән дауалағандар.

✓ *Ҡайһы саҡ, нишләп Башҡорт Википедияһында теге йәки был нәмә хаҡында мәғлүмәт юҡ, тип һорайҙар. "Ә ниңә үҙең яҙмайһың? Нимәләр хаҡында мәҡәлә юҡ икән, теләгән кеше үҙе инә лә яҙа.", - тип яуаплайым.*



# БУЛМЫШЫБЫҘ, донъя кимәлендә танылыу юлы ул -

**Башҡорт Википедияһының ойошторолоуына 10 йыл тулды. Ошо ваҡыт эсендә халыҡ унның әһәмиәтен аңлап өлгөрҙөмө, юҡмы, әллә ул һаман да энтузиастар араһында ғына алып барылған проект булып ҡалдымы? Барлыҡ һорауҙарға яуап эҙләү маҡсатынан редакцияға Башҡорт Википедияһы хакимы Рөстәм НУРЫЕВты, интернет Ағинәйе Гүзәл СИТДИҠОВАны, Аҡһаҡал - Азат ХӘЛИЛОВты һәм йәштәр менән бер рәттән виртуаль киңлектәрҙе гиҙеп, милләтебеҙҙе рухи арғымаҡҡа атландырырға тырышыусы Мәрйәм БУРАҠАЕВАны саҡырҙыҡ.**

**▸ Башҡорт Википедияһының милләт өсөн бөтөн донъя кимәлендәге әһәмиәте нимәлә?**

**Г. Ситдиҡова:** Бөгөн Башҡорт Википедияһының әһәмиәтен аңлаусылар арта баралыр, тип уйлайым. Тәүҙә ошондай проект барлығын кеше бик белмәй ине. Икенсенән, уны асып ҡарау өсөн компьютерға ла, кеҫә телефондарына ла башҡорт клавиатураһы ҡуйылыуы мөһим. Башҡорт хәрефтәре юҡ икән, туған телебеҙҙә яҙылған берәй мәғлүмәтте эҙләй башлаһаң, ул асылмай. Хәҙер инде күптәр башҡорт клавиатураһын ҡуйып алды. Шуға күрә, уның әһәмиәтен аңлаусылар ҙа, ҡулланыусылар ҙа арта, сөнки ҡушылыусылар күбәйә. Сит яҡтарҙан да башҡортса яҙышҡан авторҙарҙың килеп сығыуы үҙенә күрә ҡыуаныслы. Мәҫәлән, япон егете Юто Һишияма башҡортса мәҡәләләрен яҙып ҡуйҙы Википедияға, был да проекттың мәртәбәһен арттыра. Ә иң мөһиме, әлбиттә, ҡуйылған мәҡәләләрҙең сифатлы булыуы. Әгәр ҙә кеше сифатлы мәғлүмәт ала икән, файҙаланыусылар, һис шикһеҙ, Википедияға ҡабаттан инә, эҙләй, бер-береһенә мәғлүмәт тапшыра. Бигерәк тә уҡытыусылар, уҡыусылар, студенттар төп файҙаланыусылар булып тора, тип уйлайым.

**А. Хәлилов:** Бына мин - уҡытыусы, һәм Википедиялағы мәғлүмәттәрҙе дәрестә лә ҡулланам. Күмертауҙа урыҫлашҡан милләттәштәребеҙ йәшәй. Улар балаларын, башҡортса өйрәтегеҙ, тип, беҙгә килтерәләр. Уҡытыусыға нимә ҡала инде? Рус Википедияһынан берәй мәҡәләне башҡортса яҙырға ҡушам балаға. Ошо эште башҡарған арала улар мәҡәләнең йөкмәткеһен аңлап ала. Бына шулай, Башҡорт Википедияһы урыҫлашҡан балаларыбыҙҙы яйлап ҡына асылыбыҙға ҡайтарыуы менән дә отошло. Икенсенән, Башҡорт Википедияһы аша бар донъяға Башҡортостан тураһында күберәк мәғлүмәт еткереү мөмкинлеге бар. Шуның өсөн мин уҡытыусыларға, башҡаларға Башҡорт Википедияһы тураһында һөйләйем, унда ҡатнашырға саҡырам.

**М. Бураҡаева:** Ысынлап та, милләтебеҙҙе, уның тураһындағы мәғлүмәтте донъя кимәленә сығарыуҙың бер юлы ул Башҡорт Википедияһы. Беҙ интернет майҙанына ла кемгәлер яраҡлашып түгел, ә үҙ йөҙөбөҙ, үҙ булмышыбыҙ менән сығырға тейешбеҙ, тигән ҡараштамын.

Донъя картаһына күҙ һалып, XII-XIII быуаттарҙа Төрки ҡағанатында булған милләттәрҙе ҡарап сыҡтым. Унда һундар, ғағауыздар, болғарҙар, башҡорттар булған, әммә шул бөйөк ҡағанаттан башҡорт ҡына тороп ҡалған. Халҡыбыҙ ниндәй ҡанундар менән йәшәгән, ул бөгөнгәсә нисек үҙе булып ҡалған икән, тип өйрәнә башланым. Бөтөн ҡанундарыбыҙ, бөтөн һорауҙарға яуап беҙҙең халыҡ ижадында, бигерәк тә "Урал батыр" эпосында бар. Башҡорт Википедияһы ирекмәндәре менән аралашып, улар менән фекерҙәш булыуымды асыҡлап, рухи туғандарҙың артыуына һәм шул юлдың булыуына ҡыуанып, проектҡа үҙемдең өлөшөмдө индерәйем тип ҡушылып киттем. Сөнки был бит беҙҙең халыҡҡа бик ҙур мәртәбә.

**А. Хәлилов:** Википедия - заман талабы, заман күренеше тип әйтергә мөмкин. Ул тормошобоҙға ҡапыл ғына килеп инде, шуға күрә күпселек әле һаман уның эсенә инеп китә алмай, әммә уларҙы яйлап ылыҡтырырға кәрәк. Беҙҙең халыҡтың менталитеты шундай бит, ҡунаҡҡа сәғәт бергә саҡырһың, икегә килә. Әммә әлеге ваҡытта быңдай ығышлыҡҡа юл ҡуйырға ярамай. Әгәр менеп етер үргә, барып етер урынға бер сәғәткә генә һуңлайбыҙ икән, урыныбыҙҙы башҡалар яулап аласаҡ. Интернет киңлегендә барыһын да секундтар хәл итә. Мәҫәлән, республика буйынса әллә күпме башҡорт теле уҡытыусыһы бар. Уларҙың һәр ҡайһыһы Башҡорт Википедияһына инеп, үҙенең генә шәжәрәһен яҙһа ла, мәҡәләләр һаны күпкә артасаҡ. Йәштәребеҙҙе алға әйҙәүҙә лә Башҡорт Википедияһының роле бик ҙур, әммә әлегә халыҡ уны аңлап еткерә алмай.

**Р. Нурыев:** 2013 йылдың декабрендә ЮНЕСКО Википедия проектын булдырыусы Джимми Уэльсҡа Нильс Бор алтын миҙалын тапшырҙы. Википроект идеяһын хәҙер миллионлаған ирекмән күтәреп алды. Нимә әйткем килә, идея - идея менән, әммә ирекмәндәр булмаһа, ул проект тормошҡа ашмаҫ ине. Һәм дә донъя кимәлендә ЮНЕСКО тарафынан әһәмиәтле тип табылған проекттың, һис шикһеҙ, башҡорт милләте өсөн дә файҙаһы бик ҙур.

**▸ Башҡорт Википедяһы материалдарын дәрестә, балаларҙы туған телгә ылыҡтырыу өсөн дә файҙаланырға була, тип әйттегеҙ. Ә беҙҙең уҡытыусылар һаман да дәреслектәр юҡ, программалар камил түгел, тип зарлана…**

**М. Бураҡаева:** Әлбиттә, илһөйәр уҡытыусы икән, ул биологиянан да, географиянан да, тарихтан да, хатта шул уҡ математиканан да, урындағы компоненттү, бигерәк тә башҡорттоң ғилемен дә дәрестәрендә файҙаланасаҡ. Ни өсөндөр беҙ дөйөм кешелек ҡиммәттәренә ынтылабыҙ, әммә юл башында барыбер ҙә тәүге аҙымды яһарға кәрәклеген онотабыҙ. Дөйөм кешелек философияһын өйрәнгәнгә тиклем, беҙ тәү сиратта башҡорт философияһын белеп, шунан һуң ғына дөйөм философияға килергә тейешбеҙ. Был ҡағиҙәне бөтөн өлкәләргә ҡарата ла ҡулланырға була. Интернационализм ул патриотизмға нигеҙләнергә тейеш. Интернациональ нигеҙҙә тәрбиәләп, ҡабаттан илһөйәрлеккә ҡайтып булмай. Шуға күрә, мәғариф системаһында ла иң элек балаға үҙенең эргә-тирәһендәге тарихты, мәҙәниәтте, мөхитте һ.б. өйрәтергә кәрәк.

**Г. Ситдиҡова:** Был проект уҡытыусыларҙың эштәренә бер плюс ҡына. Әйтәйек, география дәресен үткән ваҡытта ла Башҡорт Википедияһын асып, үҙҙәре йәшәгән төбәк тураһында ниндәй мәғлүмәттәр барлығын ҡарап, нимә өҫтәй алабыҙ, тип уйлаһындар ине. Балалар хәҙер барыбер интернетта ултыра, шуға күрә синыф етәкселәре лә, мәктәп директорҙары ла уларҙың ваҡытын файҙалы бер яҡҡа йүнәлтергә тырышырға тейеш. Хатта география уҡытыусыларына үҙҙәренең ауылдары тирәһендәге топонимияны йыйып, Башҡорт Википедияһына индерергә тигән бурыс та ҡуйырға кәрәктер. Мәрйәм апай әйткәнсә, илһөйәр уҡытыусылар һәр фән буйынса ла ошо проектты файҙалана ала. Мәҫәлән, ботаника, зоология, биология булһын - урман кейектәре, дарыу үләндәре, ағастар һ.б. күп нәмәләрҙе, ошо өлкә буйынса эшләгән билдәле шәхестәребеҙҙе, башҡа бик күп мәғлүмәтте дәрестәрҙә төбәк компоненты булараҡ файҙаланырға мөмкин. Унан һуң, Башҡорт Википедияһында башҡорт телен ҡулланыу даирәһе киңәйә, ниндәй генә фән терминдары булмаһын, уларҙың башҡорт телендәге тәржемәһен уҡып була. Балаларыбыҙ, йәштәребеҙ бөтөн фәндәрҙәге төшөнсәләрҙе лә туған телендә белергә тейеш. Дөйөм Википедия ҡанундары буйынса, һәр телдә лә мотлаҡ булырға тейешле мең мәҡәлә бар - машина эшләү булһынмы ул, банкирҙар булһынмы, философтармы һ.б. Шуларҙы тәржемә иткән ваҡытта телебеҙ мөмкинлектәренең бик ҡеүәтле икәненә иғтибар иттем. Башҡорт Википедияһы - телдең байлығын да күрһәтеү ул. Әгәр Башҡорт Википедияһына балаларҙы йәлеп итәбеҙ икән, мәҡәлә яҙған ваҡытта уларҙың телмәре байый, аң даирәләре киңәйә, зиһене үҫешә. Һис шикһеҙ, уҡыусылар әҙер мәҡәләне ҡулланыусы ғына түгел, ә үҙе ошо виртуаль донъяны булдырыусы ла булырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта Википедияның дуҫтары бик күп булыуын иҫәпкә алып, унда һәр тараф ирекмәндәре менән бергәләшеп дөйөм бер виртуаль клуб, дөйөм бер ҡор төҙөп, Башҡортостан тураһында һөйләргә, уның хозурлығын асып бирергә, телебеҙҙең матурлығын, байлығын күрһәтергә була. Был бит үҙе үк илһөйәрлек тәрбиәләй.

**▸ Интернет селтәрендә шундай ҡыҙыҡ бер һүрәт бар ине: трибуна артындағы кеше "Кем тормоштоң үҙгәреүен теләй?" тип мөрәжәғәт иткәс, аудиториялаларҙың барыһы ла ҡул күтәрә. Ә инде "Кем үҙгәреүҙе үҙенән башлай?" тиеүгә, берәү ҙә ҡул күтәрмәй. Тимәк, беҙҙең һәр ҡайһыбыҙға эште үҙебеҙҙән башларға кәрәк…**

**А. Хәлилов:** Ысынлап та, иң әсендергәне - ҡайһы берәүҙәрҙең телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу йүнәлешендә булһынмы, башҡа өлкәләме, һаман да кемгәлер ышанып, кемдеңдер килеп эшләп биреүен көтөп ятыуы. Уны беҙҙән башҡа берәү ҙә эшләмәйәсәк. Үҙебеҙ башларға тейешбеҙ. Рәхмәт, әлдә Башҡорт Википедияһын күтәреп алып барыусы Рөстәм Нурыев бар, тип ҡуям ҡай саҡта, ул ирекмәндәрҙе йәлеп итеп, кәрәкле йүнәлешкә бороп, башлап йөрөй бар эштә. Алматыға барғанда ҡайһы бер милләттәрҙең үҙ телдәрен Гугл-тәржемәсегә индергәнен күреп аптырағайныҡ. Шул ваҡытта Рөстәм Нурыев, ошо проектҡа тотонорға кәрәк, тигән теләк менән янып ҡайтҡайны, әле үҙе тотондо, яйлап тормошҡа ашырып килә. Башҡортса Гугл-тәржемәсе лә булһа, милләттең теле юғалмаясаҡ. Сөнки 2016 йылдан ҡайһы илгә барһаҡ та, ниндәй телдә аралашһаҡ та, ошо кеҫәгә һыйған электроника ярҙамында, бер ниндәй тәржемәсеһеҙ аңлашып буласаҡ.

**Г. Ситдиҡова:** Яңыраҡ балҡар шағиры-тәржемәсе Мөхәммәт Геккиев менән һөйләшеп алдыҡ. Ул Аҡмулланың шиғырҙарын балҡар теленә тәржемә итә башлаған. Минән урыҫсаға һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп биреүҙе һорай. Ғәмәлдә бит беҙҙең телебеҙ оҡшаш. Ниңә Гуглда башҡортса тәржемәсе юҡ, нишләп һүҙлек эшләмәйһегеҙ, ти. Мин ул эштең йәмәғәт башланғысында ғына эшләнеүен әйттем. Ә улар беҙҙең республика шундай бай булғас, дәүләт ярҙам итә, хөкүмәт кимәлендә эшләйҙәр, тип уйлай. Юҡ, Википедия ла, социаль селтәрҙәрҙәге төркөмдәр ҙә бер ниндәй түләүһеҙ йәшәп килә. Ҡайһы саҡ, нишләп Башҡорт Википедияһында теге йәки был нәмә хаҡында мәғлүмәт юҡ, тип һорайҙар. "Ә ниңә үҙең яҙмайһың? Нимәләр хаҡында мәҡәлә юҡ икән, теләгән кеше үҙе инә лә яҙа. Уға бер кем дә ҡушмай, бер кем дә аҡса түләмәй. Милләтеңде яратаһың икән - инәһең дә эшләйһең", - тип яуаплайым. Әле бына мәҡәлдәрҙе өҫтәшеүсе бер авторыбыҙ - Фирүзә Хөсәйенова килеп сыҡҡанына бик һөйөндөм. Алла бойорһа, мәҡәлдәр буйынса ла инкубаторҙан да сығып алырбыҙ әле.

**▸ Ҡайһы бер урындарға интернет селтәренең барып етмәгәнен, шулай уҡ Википедия проекты менән саҡ таныша башлаусыларҙың да барлығын иҫәпкә алып, инкубаторҙың нимә икәнен дә аңлатып китеү кәрәктер…**

**Г. Ситдиҡова:** Инкубаторҙы ябай ғына итеп себеш сығарыу менән сағыштырырға була: инкубаторҙағы йомортҡалар яйлап-яйлап үҫешә-үҫешә бер көн себеш булып килеп сыға. Википедияла ла шулай: ниндәйҙер бер бүлек асыла ла, ул бөтөн халыҡ ҡуллана алырлыҡ кимәлгә еткәнсе, инкубаторҙа үҫтерелә. Әле мин инкубаторҙа ВикиӨҙөмтә тигән проектта мәҡәл-әйтемдәр яҙам. Әйтеп үтеүемсә, эшемде бөтөн файҙаланыусылар күрә башлаһын, эҙләгестәр табып бирә алһын өсөн даими рәүештә ярҙам итеп торған кешеләр, проектты тулыландырыу, камиллаштырыу, әлеге лә баяғы шул система төшөнсәләрен тәржемә итергә кәрәк. Бына ошо йәһәттән кешеләрҙең инеп, проектҡа ҡушылып китеүе бик мөһим. Башлаған ҙур-ҙур эштәр бар, үкенескә күрә, улар себеш булып үҫеп етә алмай, йомортҡаны ярып сыға алмай ята. Уның ниндәй ваҡытта сығыуы - оҙаҡмы, тиҙме - ирекмәндәрҙең әүҙемлегенә бәйле.

Унан тыш, инкубаторҙа һүҙлектәргә лә баш һалып ҡуйғанбыҙ. Башҡортса-монголса һүҙлеккә байтаҡ һүҙҙәр индерҙем. Әзербайжанса-башҡортса һүҙлек башлап ҡуйғанмын. Уларҙы үҫтереү йәһәтенән тел белгестәренә ҙур өмөт бағлайым. Мәҫәлән, инглиз, алман (немец), француз телен туранан-тура башҡортсаға тәржемә итеп, сит телдәр уҡытыусыларының, ғөмүмән, башҡорт телен камил белгән кешеләрҙең әүҙем ҡушылыуы зарур. Ҡайһы берҙә, мин бит ул телде камил белмәйем, тип, һүҙлеккә тотонорға ҡурҡалар. Мин дә монгол телен камил белмәйем, шулай булһа ла тотондом, сөнки мин уны эҙләгес-тәржемәселәр аша, рус теле аша тәржемә итәм.

**Р. Нурыев:** Иң башта Википедия проекты ғына булды һәм ул 287 телдә алып барыла ине. Шунан, беҙгә лә ул бүлек кәрәк, тип, башҡа халыҡтар килә башланы. Ҡайһы бер бүлектәр бөтөнләй йәшәмәй, үле тора. Шуның өсөн донъя кимәлендә тикшереп, тәжрибә үткәреп, үҙенең йәшәүен иҫбатлай алған проектты артабан үҙаллы сығарыу өсөн инкубатор булдырылды. Хәҙер инкубаторҙа Википедияның ғына 493 тел

✓ *Ҡаҙандан ике егет килгәйне. Улар А. Матросовтың Шәкирйән Мөхәмәтйәнов икәнлеге раҫландымы, тип һорашып торҙо. Энциклопедияға индереп ебәрәбеҙ, тип тә хәбәр һалдылар. Индергәндәр, хатта милләтен татар тип яҙғандар.*



проекттары ята, үткән йылда асылған Сыбыр Википедияһы (себер татарҙары) вәкиле беҙгә конференцияға киләсәк. Беҙ инкубаторҙа башҡортса китапхана, һүҙлек, әҙәмтә бүлектәрен эшләнек. Шул уҡ ваҡытта яңылыҡтар булеген эшләргә була, был йүнәлеште журналистар башлаһа, бик шәп булыр ине. Сәйәхәтсе (ВикиГид) бүлеге бар. Викитөрҙәрҙә тик биологик төрҙәр тураһында яҙыла.

**▸ Тимәк, илһөйәрлек сағылышының бер критерийы булып Википедияла әүҙем яҙышыу ҙа тора?**

**Г. Ситдиҡова:** Википедияла ла илһөйәр кеше эшләүе мөһим. Беҙҙең әле мәҡәләләр күп, уларҙы тулыландырыуы ҙа, төҙәтеү ҙә кәрәк, сөнки ҡайһы берҙә кереп, вандализм менән шөғөлләнеүселәр, йәғни мәҡәләләрҙе боҙоп төҙәтеүселәр ҙә бар: шәхестәребеҙҙе икенсе милләт итеп яҙыусылар булһынмы, йәки булған ҡаҙаныштарҙы кәмһетергә тырышһындармы. Шуның өсөн дә беҙҙең мәғлүмәтле, белемле кешеләребеҙ мөмкин тиклем быға битараф булмаҫҡа тейеш. Википедияға бөтөн донъянан инәләр, тимәк, башҡорт телендәге мәҡәләләр юғары

**донъяға күрһәтеү ҡулайыраҡ та, уңайлыраҡ та, отошлораҡ та түгелме?**

**Р. Нурыев:** Википедия төрлө халыҡтарҙың телендә алып барыла. Һәм бер үк мәҡәләне төрлө телдәрҙә яҙырға була. Башҡорт Википедияһының 10 йыллығына арнап, башҡа телдәрҙәге бүлектәрҙә Башҡортостан тураһында мәҡәләләр яҙыу буйынса "Башҡортостан - Википедияла" тигән халыҡ-ара конкурс иғлан итергә ниәтләнәбеҙ. Мотлаҡ ниндәйҙер айырым бренд менән сикләмәйбеҙ. Яҡын көндәрҙә Башҡортостан энциклопедияһы үҙенең ете томлығын онлайн версияға сығара һәм был башҡа телдәрҙәге википедиясыларға, ошо мәғлүмәттәргә таянып, Башҡортостан тураһында мәҡәләләр яҙыуға төплө нигеҙ буласаҡ. Конкурс

**М. Бураҡаева:** Үҙебеҙҙекен үҙебеҙҙеке тип иҫбат итеп өйрәнергә ваҡыт инде беҙгә. Башҡорт Википедияһы - ул донъяға ишек, донъя киңлегенә алып сығасаҡ оло юл. Был юлға беҙ үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы ғына түгел, ә ниндәйлегебеҙҙе белеп-белгертеп булғаныбыҙҙы раҫлап аяҡ баҫырға тейешбеҙ. Юғиһә булғаныбыҙ юҡҡа сығарырға әҙер торабыҙ йәки дөйөм олоғара эш башлаған саҡта төймәләй генә мәсьәләлә бәхәс ҡуптарабыҙ. Мәҫәлән, төрөктәрҙәге мәғлүмәттә Ерәнсә сәсәндең Башҡортостанда Үрген ауылы эргәһендә ерләнеүе хаҡында әйтелгән. Ә Үрген ауылы тирәһендә бер ни ҙә юҡ. Шуға күрә, Үрген ауылы кешеләренән һорашып, киң билдәле сәсәндең ҡайҙа ерләнгәнен белеп, таш ултыртыу мәсьәләһен күтәрҙем. Ул

**теләүселәрҙә, юғары планка ҡуйылды, беҙ уларҙың кимәленә етмәгәнбеҙ әле, тигән баҙнатһыҙлыҡ барҙыр?**

**Р. Нурыев:** Интернетта кемдең кем икәне түгел, уның әйткән фекере, эшләгән эше мөһим. Шул уҡ уҡытыусы Башҡорт Википедияһында донъя кимәлендәге абруйлы ғалим булып танылып китеүе ихтимал. Төплө фекер менән яҙһа, тиҙ арала үҙен шул тиклем юғары кимәлгә күтәрәсәк. Нигеҙле, дәлилле итеп яҙмаһа, уны викийәмғиәт ҡабул итмәйәсәк. Башҡаларҙың фекерен инҡар итмәйенсә, үҙеңдекен иҫбатлай белергә кәрәк. Юҡһа, бар көсөн башҡа фекерҙе хурлап бәхәсләшеүгә һалған, үҙенекен иҫбатлай алмаған дәрәжәле ғалимдарға "туҡмаҡ" эләккән осраҡтар ҙа бар. Әммә Википедия-

раина, Ҡаҙағстан), сығыш яһарға теләүселәр байтаҡ һәм планлаштырған бер көнгә һыйбыҙмы, юҡмы, тип тә уйлай башланыҡ. Тәүҙә уны йәйгеһен, һабантуй менән бер ваҡытта үткәреүҙе күҙаллағайныҡ, әммә ул ваҡытта ғәмәли яғы булыр, ғилми яғы юғалып ҡалыр ине. Ә беҙгә сараның ғилми яғы ҡәҙерлерәк. Шуға Вики-Һабантуй форматын һайланыҡ, ҡунаҡтарҙы ҡаршы алған беренсе көндә символик рәүештә булһа ла һабантуйҙа булған милли уйындарыбыҙҙы күрһәтергә ниәтләйбеҙ.

Икенсе маҡсат - донъя кимәлендә ҙур, көслө википедиялар ғына түгел, ә барлыҡ халыҡтарҙың да үҙҙәренең википедияһы булыуын, уларҙы үҫтереү милләттең ҙурлығына ла, бәләкәйлегенә лә ҡарамай, тап шул халыҡтың үҙенең бурысы булып тороуын аңлатыу. Беҙгә килгән ҡунаҡтарҙан үҙебеҙгә файҙаны күберәк алып ҡалырға кәрәк. Улар бит аҙаҡ Башҡорт Википедияһынан башҡорт халҡы тураһындағы материалдарҙы үҙҙәрендә урынлаштырасаҡ.

**Г. Ситдиҡова:** Был сара Хөкүмәт тарафынан уҙғарылмай, йәмәғәт башланғысында, шуға уны үткәреү ҙә күмәк көс талап итә, ирекмәндәр кәрәк. Иғәнә йыйыу бик аҡрын бара. Мәҡәлә яҙмай-



# ҮҘ ЙӨҘӨБӨҘ МЕНӘН...

## Башҡорт Википедияһы

сифатлы һәм ғәрипләнмәгән булырға тейеш. Ярҙамсылар бик күп кәрәк. Беҙҙең әле булғандары бик тырыш һәм мәғлүмәтлеләр, әммә был ғына көс етерлек тип әйтеп булмай. Һәр башҡорт үҙе инеп, һис юғы, үҙенең шәжәрәһе, ата-бабаһы тураһында яҙып сыҡһа ла файҙа булыр ине. Сөнки һәр затта тормошта, бала тәрбиәләүҙә үрнәк булырлыҡ күренекле кешеләребеҙ етерлек. Беҙ ана шуларҙы ла күрһәтергә тейешбеҙ.

Әйткәндәй, рус телендәге мәҡәләләргә лә, әгәр ул беҙҙең Башҡортостан, шәхестәребеҙ, ҡаҙаныштарыбыҙ һ.б. тураһында икән, инеп ҡарап йә тулыландырып, йә төҙәтмә һалып сығам. Беҙгә бөгөнгө көн батырҙарыбыҙ тураһында һөйләргә, рус телендәге мәҡәләләргә лә ҡул тығырға, яңыларын яҙырға кәрәк. Үҙ йөҙөбөҙҙө ниндәй телдә булһа ла күрһәтеү мөһим. Әле Вячеслав Черневтың эсперанто телендә, хатта немец теленең ҡайһы бер диалекттарында, поляк телендә башҡорт теле тураһында мәҡәләләр яҙғанына һөйөнәм. Был да ҙур эш. Тел белеү - ул байлыҡ, был байлыҡ милләтебеҙҙе күрһәтеү, аңлатыу, бәйләнештәр булдырыу өсөн бик-бик кәрәк һәм уны тел белгән йәштәребеҙ мөмкин тиклем файҙаланырға тейеш.

**▸ Брендтарыбыҙ бик күп, әммә ни өсөн Башҡортостанды ситтә белмәйҙәр? Википедия аша ошо брендтарыбыҙҙы**

булғас, дәртләндереү сараһын да уйлап табырға кәрәк. Был, әлбиттә, өс кеше генә хәл итә торған эш түгел, бында дөйөм башҡорт халҡы берләшеп эшләнәк, сит милләттәрҙән ярҙам итешергә, эште ойоштороп ебәрергә әҙер кешеләр бар. Беҙгә бында эште башлап, күрһәтеп кенә бирергә кәрәк. Әле генә Мәскәү ҡалаһы "Узнай Москву из Википедии" тигән конкурс башлап ебәрҙе. Әммә ул рус Википедияһында. Дөйөм Википедияла ла шундай конкурстар булып тора.

**Г. Ситдиҡова:** Әгәр ҙә "Узнай о башкирах на языках мира" тигән конкурс эшләнәк, бигерәк тә отошло буласаҡ. Мәҫәлән, инглиз телендә беҙҙең башҡорттар тураһында, Башҡортостан тураһында нимәләр яҙылған икән? Ул бит донъя кимәлендә аралашыу теле. Шулай булғас, бында, миненсә, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ошо мәсьәләне хәл итеүҙә ярҙам ҡулы һуҙырға тейеш, тип уйлайым. Әллә ниндәй ҙур проект төҙөп тораһы ла, аҡса ла һалаһы түгел. Үҙебеҙҙең ирекмәндәрҙе, ҡоролтайсыларҙы йыйып, ошо хаҡта етди һөйләшергә генә кәрәк. Башҡорт Википедияһының 10 йыллығын үткәргәндә лә Ҡоролтай ситтә торорға тейеш түгел. Сөнки был милләт өсөн телде һаҡлау, башҡортто, Башҡортостаныбыҙҙы, тарихыбыҙҙы күрһәтеү, алдағы көндәргә үҫеш йөнәтенән дә бик мөһим сара.

саҡтағы район етәксеһе Марат Түләбаев был эште ихлас күтәреп алды. Әммә ауыл ҡарттары араһында бәхәс китте. Һигеҙ урынды билдәләнеләр. Аты менән ҡуша һикергән ҡая аҫтын да күрһәттеләр. Әммә унда бер кем дә барып йөрөмәйәсәк, әйҙәгеҙ, иң матур, кеше йөрөрлөк урынға таш ултыртайыҡ, тип, район етәксеһенең ҡәтғи ҡарары менән урын һайланды. Йәки бына Учалы районы Ҡунаҡбай ауылы мәктәбендә Александр Матросовҡа музей асылған саҡта барғайным. Ҡаҙандан да ике егет килгәйне. Улар А. Матросовтың Шәкирйән Мөхәмәтйәнов икәнлеге раҫландымы, тип һорашып торҙо. Энциклопедияға индереп ебәрәбеҙ, тип тә хәбәр һалдылар. Индергәндәр, хатта милләтен татар тип яҙғандар. Ә беҙ, журналист Рәүеф Насиров ярты ғүмерен сарыф итеп иҫбат иткән мәғлүмәттең дә дөрөҫлөгөн раҫларға ҡурҡып, үҙ энциклопедиябыҙҙа уның милләтен яҙмағанбыҙ! Үҙебеҙҙең рухи байлығыбыҙға битараф булыуыбыҙ арҡаһында байтаҡ ҡиммәттәребеҙҙән ҡолаҡ ҡағыуыбыҙ ихтимал. Википедия аша бик күп нәмә эшләп була. Тағы бер таптыр әйтеп китеүҙе урынлы тип һанайым: ошо киң ҡоласлы мөмкинлекте файҙаланып, донъя киңлегенә үҙебеҙҙекен бирмәй, башҡаларҙыҡына ҡул һуҙмай сығырға кәрәк. Раҫланмаған рухи байлығыбыҙ бихисап беҙҙең. Өйрәнергә, раҫларға, киләсәк быуынға бәхәсһеҙ мәғлүмәт ҡалдырырға кәрәк.

**▸ Википедияла белемле, ғилемле кешеләр эш башланы. Бәлки, был эшкә ҡушылырға**

нан ҡурҡмайынса яҙышырға кәрәк. Викийәмғиәт, дөйөм алғанда, ыңғай ҡарашлы ирекмәндәрҙән тора, белмәгәндәргә итәғәтле итеп ярҙам ҡулы һуҙырға әҙерҙәр.

**Г. Ситдиҡова:** Минең дә, Башҡорт Википедияһына яҙғанда хаталаныуҙан ҡурҡмағыҙ, унда бит хакимдар бар, улар йә төҙәтә, барлыҡ булмаһа, үткәрмәй, тип яҙғаным булды. Үҙемдең "Бәйләнештә" сайтындағы төркөмдәрҙә һәр ваҡыт аңлатыу алып барам. Әйтергә кәрәк, беҙҙең халыҡ барыбер ҙә интернетта әүҙемләшә һәм кәйефе лә үҙгәрә. Башта, 3-4 йыл элек, илаулау күп ине. Хәҙер позитив ҡубәйә башланы, сөнки, һәр кеше ҡулынан килгәнен эшләргә тейеш, тигәнгә баҫым яһап яҙыусы авторҙар йөгөнто яһай. "Үҙ йортоңдан башла!" - шулай тип яҙалар хәҙер бик йыш.

**▸ Апрель аҙағында тарихыбыҙҙа беренсе тапҡыр Вики-Һабантуй уҙғарыла. Ул ниндәй форматта үтәсәк һәм уның төп маҡсаттары нимәлә? Әлеге ваҡытта ойоштороу мәсьәләләрендә ниндәй ҡыйынлыҡтар бар?**

**Р. Нурыев:** Башҡорт халҡының брендтарының береһе булған Һабантуй рәүешендәге был асыҡ сара 24-26 апрелдә үтәсәк. Төп сара - ғилми-ғәмәли конференция 25 апрелдә Башҡорт дәүләт университетында буласаҡ. Уға кем теләй, шул килә ала. Төп маҡсаты - донъя кимәлендә ошо йүнәлештә ниндәй эшмәкәрлек барғанын үҙебеҙҙең халыҡҡа күрһәтеп, һөйләп биреү. Ситтән килергә теләүселәр (Филиппин, Алжир, Израиль, Эстония, Польша, Ук-

ҙар икән, һис юғы, ошо иғәнә йыйыуғамы, башҡорт милли ризыҡтарын әҙерләп килтереүгәме үҙ өлөшөн индерһен ине милләттәштәребеҙ. Ситтән кешеләр килә икән, беҙ уларға ҡунаҡсыллыҡты ла, аш-һыу байлығын да, ҡунаҡ саҡыра белеү мәҙәниәтен дә күрһәтеп ҡалырға тейешбеҙ. Был Википедияның йөкмәткеһенә генә ҡайтып ҡалмай, беҙ үҙебеҙҙең ниндәй милләт икәнлегебеҙҙе күрһәтәбеҙ.

**Р. Нурыев:** Телләгәндәр интернет селтәренә инеп, башҡортсамы, руссамы, инглизсәме, "Вики-һабантуй-2015" тип яҙып эҙләнә, Башҡорт Википедияһында асылған ошо битҡә барып юлығасаҡ. Унда иғәнә йыйыу өсөн уң яҡта махсус иҫәп бирелгән. Күңелендә башҡорт рухын йөрөтөүсе, "Мин булмаһам, кем һуң?" тип уйлаусы илһөйәр, телһөйәр милләттәштәребеҙ ошо иҫәпте тулыландырыуға үҙ өлөшөн индерһә, бик сауаплы эш булыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халыҡ шағиры Рауил Бикбаев үҙенең бер шиғырында:**

*Кәрәк түгел милләтем*
*тип тамаҡ ярыу,*
*Кәрәк бары милләт өсөн*
*юлдар ярыу,*
*Кәрәк бары көн-төн тимәй*
*алға барыу,*
*Берләшәйек, барлыҡ донъя*
*башҡорттары!* **- тип оран һала икән, бөгөн әңгәмәлә ҡатнашыусылар берләшеүҙең бер урыны итеп Башҡорт Википедияһына һәм туғандаш ВикиКитапхана, ВикиӘҙәмтә (Мәҡәл), ВикиҺүҙлек проекттарына саҡыра!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

***✓ Эй, һағына ла ине ул тыуған төйәген! Йыш ҡына төшөндә Һаҡмар, йә Йылайыр йылғаһына ятып, һыу эсә-эсә һыуһынын ҡандыра алмай, тамағы кибеп, тирләп-бешеп килеп уяна торған булды.***




**Бөйөк Ватан һуғышының тәүге көнөндә хәбәрһеҙ юғалған меңәрләгән ҡорбандарҙың береһе - ҡыҙылармеец Һөйөндөков Заһитулла ағайымдың яҡты иҫтәлегенә бағышлайым.**

* * *

Эй, кеше яҙмышы... Эсер һыу, ашар ризыҡ, дөрөҫөрәге, Аллаһы Тәғәлә яҙған тәҡдир әҙәм балаһын ҡайҙарға ғына илтеп ташламай. Егерме дүрт йәшлек типһә тимер өҙөрҙәй, баһадирҙай мыҡты кәүҙәле, йәш, һылыу башҡорт егетенә Америка Ҡушма Штаттарының һыуын эсергә лә яҙған икән.

...Ризыҡ ситкә яҙһа-яҙһын,
Тупраҡ ситкә яҙмаһын, - тип эстән генә әсенеп көйләне егет. Тыуған иленә ҡасандыр әйләнеп ҡайта алыу өмөтөнән әкренләп төңөлә лә башланы. Пароход менән Америка еренә килеп төшкәс, юлда танышып алған демобилизацияланырға тейеш булған бер ҡара тәнле һалдат уны таныш фермерына эшкә урынлаштырҙы.

- Таныш булығыҙ, фермер әфәнде, Ричард, - тине Джон Рәшиттең исемен үҙенсә үҙгәртеп, - әсирлектән азат ителгән рус һалдаты.

Рәшиттең быға саҡлы күргәне булмаған ғәҙәттән тыш ҙур тирәсле эшләпә кейгән Смитт (хужаны шулай тип атайҙар ине) йылмайып ҡул бирҙе һәм шунда уҡ һораулы ҡарап:

- Рус? - тине.

Башын һелкеп, ҡулдары менән ниҙер ишаралап һөйләүенә ҡарап, фермерҙың: "Юҡ, был рус түгел, рустар башҡасараҡ була", - тигәнен аңланы егет, һәм үҙе үк электән өйрәнгән яуабын әйтә һалды:

- Урал, - тине ул ғорур тәҫ менән, - башҡорт!

Смитт тағы йылмайҙы:

- О, Ураль, о кей!

Улар шулай итеп танышып киттеләр. Бәхетенә, Рәшиткә был юлы ла таныш эше - һыйыр малы ҡарау тейҙе. Ауырлыҡтарға күнеккән йәш егеткә был фермалағы эш бик еңел һымаҡ тойола ине. Иң мөһиме - Рәшит хәҙер бушлай эшләмәй. Смит уға "доллар" тип аталған эш хаҡын түләп бара.

Рәшиткә Джон биргән Ричард ҡушаматы бөтөнләйгә йоҡто ла ҡуйҙы. Күпмелер ваҡыттан һуң ул үҙен хатта Ричард тип хис итә башланы. Ләкин һәр саҡ сит телдә генә һөйләшеп йөрөгән Рәшит һаман да башҡортса уйлай ине. Эй, һағына ла ине ул тыуған төйәген! Йыш ҡына төшөндә Һаҡмар, йә Йылайыр йылғаһына ятып, һыу эсә-эсә һыуһынын ҡандыра алмай, тамағы кибеп, тирләп-бешеп килеп уяна торған булды. Германия ерендә үҙен илай-илай оҙатып тороп ҡалған Ванда һымаҡ ҡыҫҡа күлдәк кейгән осоҡ ҡыҙҙарға ҡарап, һәр саҡ баҫалҡы холоҡло, оялсан йөҙлө, ай кеүек һылыу, мөләйем башҡорт ҡыҙҙарын хәтерләне. Эйе, хәҙерге ваҡытта илдә йәшәгән булһа, һис шикһеҙ, берәй сибәр башҡорт ҡыҙына өйләнеп, бала-сағалы булып, тормош көтөп ятҡан булыр ине. Ләкин, һуғыш... Шул ҡәһәрле һуғыш уның бар хыялын, барлыҡ өмөттәрен һындырҙы. Хәҙер һуғыш бөтөүгә бөттө лә ул, ә барыбер ҡайтып булмай. Ул ғына ла түгел, туғандарына хат та яҙырға ярамай...

* * *

Йыл артынан йыл үтте. Фермерға көтөүсе булып күпмелер эшләгәс, байтаҡ ҡына аҡса туплап, Рәшит үҙенә бер бәләкәй генә үҙаллы хужалыҡ төҙөп алыуға иреште. Хатта үҙенең унлаған баш һыйыр малын ҡарау өсөн эшсе ялларға ла ҡулынан килә башланы. Көнө-төнө тырышып эшләгән фермер үҙенең хеҙмәт емешенең тәмен тулыһынса тигәндәй татый башланы. Бында һинең малыңды бер кем дә тартып алырға ниәтләмәй. Тик һалымыңды ғына ваҡытында түләп бар...

Ҡайҙарҙа ғына йөрөп, ниндәй генә ҡыҙҙар осратмаһын, Рәшит барыбер ғүмерлеккә буйҙаҡ булып ҡалды. Сөнки бала саҡтан үҙ илендә күреп үҫкән сибәр ҡараҡай башҡорт ҡыҙҙарынан башҡаларҙы үҙһенмәне. Әрме хеҙмәтенә китерҙән алда бер ваҡытта ла ҡыҙҙар менән аралашып өлгөрмәгән егет тәүҙәрәк буласаҡ ҡатынын, ни өсөндөр, тик Мәрхиә еңгәһенә оҡшаған итеп күргеһе килә ине. Тора-бара, үҙенең буйҙаҡ тормошо менән ризалашты. Ә шулай ҙа үҙен шундай гүзәл башҡорт ҡыҙҙарының наҙлауынан мәхрүм итеүгә сәбәпсе булған ҡәһәрле һуғышҡа, Гитлерға ләғнәт уҡый ине ул...

Латин хәрефтәрен белгән һәм инде инглиз телендә һөйләшкән Рәшиткә уҡырға өйрәнеүе бер ҙә ауыр булманы. Гәзиттәрҙән һәр ваҡыт донъя яңылыҡтары менән танышып барҙы. Советтар Союзындағы хәлдәр менән айырыуса ҡыҙыҡһынды. "Һалҡын һуғыш" осоронда уның иле тураһында бер ҙә тынысландырырлыҡ итеп яҙмайҙар ине гәзиттәрҙә. Алтмышынсы йылдар башында "Советтар Союзы Америкаға ядро һуғышы асырға йыйына икән", - тигән хәбәргә хатта ышана биреп тә ҡуйғайны бит Рәшит. Ә бер көндө "Рәсәй колониялары - Башҡортостан, Татарстан һәм башҡа ваҡ илдәрҙең" Рәсәй хөкүмәте тарафынан нисек ҡыҫырыҡланып йәшәүҙәре тураһында уҡып, был хәбәргә бигүк ышанып етмәһә лә, ныҡ борсолоп, шуның тәьҫирендә оҙаҡ ҡына уйға батып ултырҙы. Дүрт быуатҡа яҡын рустар менән ҡулға-ҡул тотоношоп, бергә-бергә йәшәгән башҡорт халҡы нисек инде Рәсәй колонияһы булһын, ти? Хәйер, нишләп һин ҡасаҡ Рәшит-Ричард ул турала ҡайғыраһың? Һин күптән инде үҙ илеңде һаттың бит, Рәсәйен дә, Башҡортостаныңды ла... Был уйҙарҙан һуң Рәшиткә тағы ла ҡыйыныраҡ булап китә һәм ул күңеленең төпкөлөнән үҙен-үҙе яҡлашырға һәр төрлө дәлилдәр эҙләй башлай. Йәиһә бөтә донъяһын онотorға тырыша, урамға сығып, үҙенең хужалығы менән мәшғүл була. Тик эштәрең нисек кенә уңай барып, нисек кенә байып китһәң дә, сит ерҙә нисек кенә ҡулайлашып йәшәһәң дә, Тыуған илеңде онотоу мөмкинме һуң!.. Әле һуңғы ваҡыттарҙа ғына үҙ иле тураһында ниндәйҙер күңел йылытырлыҡ мәғлүмәттәр ала башланы Рәшит.

- Ишеттеңме, Ричард, һинең Рәсәйеңдә ниҙәр барғанын, - тине хәҙер инде күрше фермер булған Смитт. - Ысынлап та революция бара бит! Советтар Союзы юҡ хәҙер...

Эйе, Рәшит был яңылыҡтарҙы бик ентекләп күҙәтеп бара. Союздағы халыҡтарҙың байтағы үҙаллылыҡ яулаған. Быныһы бигерәк тә ҡыҙыҡ тойола Рәшиткә, һәм ул шул уҡ ваҡытта аңлап та етмәй: Башҡортостан үҙаллы илме икән ысынлап та?.. Элекке сәйәси енәйәтселәр булып һаналған кешеләрҙе - "халыҡ дошмандарын" да аҡлап яталар, имеш.

Революция... Ул һүҙҙе ишеткәс тә Рәшиттең күҙ алдына Бөйөк Октябрь революцияһы килә. Сәйәси тотҡондарҙың аҡланыуына һаман да ышанып етә алмай. Шул хәбәр дөрөҫкә генә сыҡһа ине! Бәлки, берәй заман Тыуған иленә ҡайтып үлергә Аллаһы Тәғәлә насип итер? Көн һайын тигәндәй ана шундай яҡшы хәбәрҙәр ишетеп тороуына ҡарамаҫтан, инде хәҙер ныҡ ҡына ҡартайып киткән Рәшит һаман да илдәге туғандарына үҙе тураһында белдерергә баҙнат итмәне. Кем белә инде был донъяны...

...Рәшит бабай хатты артабан уҡыны: "...Совет хәрби әсирҙәре тураһында бер килке документтарҙы Германия Рәсәй хөкүмәтенә биргәнен ишеткәс тә, иң тәүҙә һинең турала белешмәйенсә йөрәк түҙмәне, Рәшит ағай. Һине - тере ағайымды түгел, хатта ҡәбереңде табырға ла өмөтөм юҡ ине, тиерлек..."

"Ҡәберем..." Үлгән кеше өсөн ҡайҙа ятыу барыбер түгелме? Тик олоғая килә, бигерәк тә һуңғы йылдарҙа шул турала күберәк уйлана башлаған Рәшит бабайға ни өсөндөр сит ил тупрағы уны үҙ итмәҫ һымаҡ тойола ине. Ул ғына ла түгел, йәне-тәне менән Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылып йәшәгән, ысын мосолман рухында булған кеше, үҙен йыназаһыҙ-ниһеҙ алып барып күмеүҙәрен бер ҙә теләмәй ине. "Тупраҡ ситкә яҙмаһын", - тигән йыр юлдары нисәмә йылдар уның телендә әйләнә. Башҡортостанда булып үткән тәүге Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тураһында ла ул матбуғат аша белде. Йыш ҡына тапшырылған "Азатлыҡ" радиоһы программаһында хатта ҡайһы бер делегаттарҙың сығышының йөкмәткеһен дә ишетеп, илай-илай тыңлап ултырғайны. Айырыуса бер делегаттың ялҡынлы сығышы йөрәгенә уҡ булып ҡаҙалды. Һүҙ ғүмер буйы ситтә йөрөгән һәм үҙ еренә ҡайтып үлергә хыялланған меңәрләгән башҡорт кешеләре хаҡында бара ине. Сығыш яһаусы шундай милләттәштәрҙе бик көслө тәнҡит утына тотто: "...Илгә үлер өсөн генә ҡайтҡан башҡорттарҙан, уларҙың сереп, башҡорт еренә бер аҙ ашлама ғына булыуын иҫәпкә алмағанда, бер ниндәй ҙә файҙа юҡ..." Был һүҙҙәр Рәшиткә төбәп әйтелгән һымаҡ тойолдо. Ләкин уның илгә ҡайтмауының сәбәбе, әлбиттә, бөтөнләйгә башҡа. Иленең тупрағына "әҙ генә ашлама" булырға ла әҙер ине Рәшит бабай.

"...Рәшит ағай, ҡайт илгә, һинең өсөн бында беҙҙең атайҙан ҡалған йорт бар. Яңы закон буйынса, элекке хәрби әсирҙәр әллә ҡасан уҡ аҡланды. Һин хыянатсы түгел..."

Рәшит бабайҙың күҙенән йәштәр аға ла аға. Эйе, ул хыянатсы түгел. Үҙенең хыянатсы түгел икәнен белмәй инеме ни ул ошоғаса? Эй, тормош, тормош. Аҙағында телефон номеры ла яҙып ҡуйылған хатты уҡып бөткәс, ахырҙа, ысынлап та, Тыуған иленә ҡайтырға ваҡыт еткәнен аңланы Рәшит бабай. Уның ҡайтыуы - туғандары өсөн бер ниндәй ҙә зыян килтермәйәсәк! Ул ашыҡмай ғына оҙон юлға йыйына башланы...

* * *

Өфө аэропортында уны Камил туғанының улы - Шамил ҡаршы алды. Юлда ауыл хәлдәрен һораша-һораша барған бабай Ҡушма Штаттағы үҙенең барлыҡ мөлкәтен һатып, бөтөнләйгә ҡайтып килеүе хаҡында әйтте. "Талха ағайыма ҡалай ныҡ оҡшаған", тип уйлап барҙы бабай рулдә барған Шамилға ҡарап.

- Һуғыш ветерандарына хөкүмәт бушлай фатир биреп ята, олатай, - тине Шамил уның уйҙарын бүлдереп.

- Эй, улым, - тине бабай, - хәҙер миңә ниндәй генә фатир кәрәк булһын инде... Тыуған яғына яҡынлашҡан һайын тағы ла нығыраҡ ҡартая төшкәндәй тойолған Рәшит бабай, улына өндәшмәһә лә, иң һуңғы "фатир"ы - мәңгелек йорт хаҡында уйлана ине...

Бик күп ауылдар һәм бер нисә ҡаланы үттеләр. Күргән бер ҡала һәм ауылға һоҡланып барҙы Рәшит бабай. Эйе, ысынлап та, тормош үҙгәргән. Нисәмә тиҫтәләгән йылдар элек әрмегә киткәндә лә Өфөгә тиклем ошо юл менән барғайны. Ни өсөндөр башҡорт ауылдарында элекке һымаҡ һалам башлы өйҙәр, кәкере-бөкөрө һикәлтәле юлдар, ярлы кейенгән кешеләрҙе күрер һымаҡ тойола ине ошоғаса.

- Шамил улым, һеҙ ҙә Европа, Америка илдәренә тигеҙләнеп киләһегеҙ икән, - тип ысын күңелдән шатланып барҙы.

- Тигеҙләнеү түгел, бер заман үтеп тә китәсәкбеҙ, олатай, - тине Шамил күңелле генә. Рәшит бабай тағы ла уйға сумды. Ниндәй рәхәт үҙ телеңдә һөйләшеп барыуҙары, етмәһә, яҡын туғаның менән! Ул бит етмеш йылға яҡын башҡортса һөйләшкәне юҡ. Өнмө был, төшмө? Ҡарттың уйҙарының осо-ҡырыйы булманы. Олатаһы йоҡлап бара икән, тип уйлаған Шамил уны үҙенең хәбәрҙәре менән башҡаса борсоманы. Ә бабай иһә бер секундҡа ла үҙенең уйҙарынан арына алманы.

- Улым, туҡта әле, - тине ауыл ситендәге зыяратҡа етәрәк. Машина геү итеп килеп зыярат тапҡырында туҡталды.

- Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған ауылдаштарға обелиск, - тип аңлатты Шамил, зыяраттан ситтә айырым кәртәләнеп алынған, башында ҡыҙыл йондоҙ торған ҡоролмаға күрһәтеп. - Был исемлектә һин дә бар, олатай, еңеүҙең илле йыллығына ҡуйған инек.

Ысынлап та, ҙур ғына исемлектә бергә уйнап үҫкән ауылдаш малайҙарының, башҡа ағайҙарҙың исемдәре араһында Фәйзулла ағаһы менән йәнәш: "Һөйәрғолов Рәшит Шаһимарҙан улы 1921 - 1941" тигән яҙыуҙы күҙ йәштәре аша уҡыны Рәшит бабай. Унан һуң әруахтар өсөн Аллаһы Тәғәләгә доға ҡылып алдылар һәм зыяратҡа инделәр.

- Быныһы ҡартатайымдың ҡәбере, - тине Шамил, - йәнәшәһендә - ҡәртәсәйем.

Рәшит бабай Талха ағаһының, Мәрхиә еңгәһенең ҡәбер таштарына яҙылған исемдәрҙе уҡыны. Тирә-йүндә ауылдаштарының ҡәберҙәре бик йыш урынлашыуына ҡарамаҫтан, Талха ағаһының янында тағы ла буш урын бар икәнен байҡап алды. "Әлхәмдүлилләһ", тине эстән генә...

**(Аҙағы. Башы 13-15-се һандарҙа).**

АФАРИН!

# БАБИЧ АСЫЛЫ МЕНӘН ОСРАШЫУ

**Бөтә кешелектең иң аҫыл аҡылдары, иң тәрән фекерҙәре китаптарҙа тупланған. Юғары баһаланған китап авторҙары, бөтәһенә билдәле ижадсыларҙың күбеһе ҡыҫҡа ғына ғүмер юлы эсендә баһалап бөткөһөҙ оло мираҫ ҡалдырған. Шундай шәхестәр араһында башҡорт шағиры - Шәйехзада Бабичтың да исеме бар. Уны хәтергә алып, Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһында шағирҙың тыуыуына 125 йыл тулыу айҡанлы матур әҙәби кисә үтте.**



*Һулдан уңға: А. Ғафаров, З. Ханнанова, Л. Абдуллина, Г. Ҡотоева, З. Бураҡаева, Т. Дәүләтбирҙина, И. Ғафаров.*

Оло быуын кешеләре халҡы яҙмышын ҡайғыртып йәшәгән, уның мәнфәғәттәре өсөн көрәшкән, Ватанын һөйгән шәхестәрҙең ижад кисәләрендә булыу ни тиклем ҙур рухи көс, илһам, балалар өсөн фәһем биреүен йыш ҡына иҫенә төшөрөп һөйләй. Балалар тәрбиәһендә ҙур роль уйнаған шундай кисәләр һуңғы йылдарҙа бик һирәк үткәрелә, тигән һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килгәне бар. Әммә ошо көндәрҙә, Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыу айҡанлы ойошторолған сарала ҡатнашыу бәхете тәтегән гимназия уҡыусылары, билдәле шәхестәр, уҡытыусылар үҙҙәрен тап шул элекке замандарҙа үткәрелгән рухлы кисәләрҙә булып ҡайтҡан кеүек тойғандыр. Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусылары һәм уҡытыусылары көсө менән ойошторолған матур кисәлә халҡына нур сәсергә, уның азатлығын күрергә ынтылып, 24 йәшендә генә һәләк булған батыр йөрәкле шағирҙың тормош һәм ижад юлына байҡау яһалды. Балалар Бабичтың төрлө йылдарҙа яҙылған шиғырҙарын яттан һөйләне, хатта ул уйнарға яратҡан мандолинала уйнап, иң оҡшаған йырын - "Ҡаҙ ҡанаттары"н да башҡарҙылар.

Шағирҙың ялҡынлы шиғырҙары яңғырап тынғандан һуң, сәхнә түренә Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт йәштәр премияһы лауреаттары Зөлфиә Ханнанова, Лариса Абдуллина, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Зөһрә Бураҡаева, Гөлназ Ҡотоева, Алмас Ғафаров, Рәмил Иҡсановтар күтәрелде. Уларҙың сығышында сағылды ла инде халыҡты халыҡ итеүсе рухтың көсәгилешлеге, быуындар араһындағы бәйләнеш. Шағирәләр балалар өсөн яҙылған шиғырҙарын ғына уҡып ишеттерһә лә, унда ла Бабич шиғриәтенең асылы сағылғандай булды. Алмас Ғафаров менән Рәмил Иҡсановтың моңло йырҙары йыр-моңға ғашиҡ булған Бабичтың күңел асылына төшөндөрә биреп ҡуйҙы. Залда тамаша ҡылыусылар ҙа ҙа ошо күҙгә күренмәгән бәйләнеште һиҙгәндер, элекке менән бөгөнгөнө тоташтырып тороусы нескә епте үҙ йөрәктәре аша үткәргәндер, моғайын.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Музыка кешеләрҙә берләштерә, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Күңелгә үтеп инерлек, йөрәктәрҙә елкендерерлек моң халыҡтарҙы тупларлыҡ, фекерҙәшкә әйләндерерлек ҡөҙрәткә эйә. Ошо көндәрҙә Мәсетле районының Оло Ыҡтамаҡ ауылында үткән Ҡумыҙҙа уйнаусылар һәм өҙләүселәрҙең V төбәк-ара конкурсы быға асыҡ дәлил булды. Ике йылға бер тапҡыр уҙғарылған ярыш быйыл ҡатнашыусыларҙың әҙерлек кимәле тағы ла юғарыраҡ булыуы менән ҡыуандырҙы.**

# МУЗЫКА БУЛҒАН ЕРҘӘ...

## насар уй уйлап булмай

Һәр сабыйҙың күңеленә ата-бабаларының рухи байлығы, моңо тыуғандан уҡ орлоҡ итеп һалынған булалыр. Ата-әсәләр иһә, үҙ милләтенең ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына, мәҙәниәтенә хас тәрбиә аша бала күңелендә морон төртөп ҡалҡыныирға әҙер генә торған шул орлоҡто үҫтерәләр. Шулай булмаһа, бишенсе тапҡыр үткәрелгән ошо конкурста ҙур сәхнәгә аяҡ баҫҡан кескәй балаларҙың ихлас сығыштарын ҡарап һоҡланыу мөмкинлеге булмаҫ та ине. Иң йәш ҡатнашыусыға ни бары дүрт кенә йәш булып сыҡты. Илүзә Зәйнетдинова йәшен әлегә бармаҡ менән генә һанап күрһәтә белһә лә, ҡумыҙҙа оҫта ғына сиртә. Атаһынан күргән - уҡ юнған, инәһенән күргән - тун бескән, тигәндәй, Зәйнетдинов фамилиялылар бөтәһе лә: ҡарты ла, йәше лә - ҡумыҙҙа уйнау оҫталары, өҙләүгә лә маһирҙар. Улар булдырған "Мираҫ" фольклор коллективы конкурстың иң юғары баһаһына - Гран-приға лайыҡ тип табылды.

- Беҙҙең ғаилә коллективы бөтәбеҙ ҙә йыйылған осраҡта 74 кешенән тороп ине, ҡыҙғаныҫҡа күрә, тормош мәшәҡәттәре арҡаһында күбеһе ҡайтып етә алманы, сәхнәгә егерме бишебеҙ генә сыҡтыҡ. Мин был ярышта быға тиклем 2007 һәм 2009 йылдарҙа яңғыҙым ҡумыҙ уйнап, балалар араһында призлы урындар алғайным, быйыл үҙемдә ололар араһында өҙләүсе булараҡ һынап ҡарарға булдым, шулай уҡ, "Мираҫ" коллективында ла сығыш яһайым. Ҡумыҙҙы һәм өҙләү сәнғәтен яратыусылар күбәйеүе, ҡатнашыусыларҙың оҫталығы артыуы ҡыуандыра, - тине 16 йәштән өлкәнерәк яңғыҙ ҡатнашыусылар араһында өҙләү буйынса беренсе урын яулаусы Заһир Зәйнетдинов.

Зәйнетдиновтар ғаиләһенең оло быуын вәкилдәре өйҙәрендә ҡумыҙ, ҡурай, мандолина, гармун, аккордеон кеүек музыка ҡоралдары һәр ваҡыт ҡул аҫтында булыуы, балаларға уларҙа уйнау рөхсәт ителеүе, тик башта үҙең өлгө күрһәтеү кәрәклеге тураһында һөйләне. Ә бына Ғафури районының Сәйетбаба ауылы "Асанай" халыҡ фольклор ансамбле составында сығыш яһаусы 79 йәшлек Рәсүл Вәхитов, үҙе яратып, өҙҙөрөп уйнаған скрипкаһына йәштәрҙе ылыҡтырыу, һөйөү тәрбиәләү, уйнарға өйрәтеү еңел түгел, тип әйтеп ҡуйҙы. "Ауыл ерендә был уйын ҡоралын ҡулына алырға теләк белдереүселәр табылмай", - тип борсола ул.

Башҡортостандың төрлө район һәм ҡалаларынан йыйылған маһир ҡумыҙсыларҙың һәм өҙләү оҫталарының кимәлен баһалаусы жюри ағзалары ҡатнашыусыларҙың ижади һәм техник яҡтан үҫешен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был конкурсҡа нигеҙ һалыусы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, виртуоз ҡумыҙсы Роберт Заһретдинов бындай конкурстарҙа профессиональ кимәлдә уйнарға өйрәнеү өсөн махсус методика буйынса уҡытыу эштәре ойоштороға кәрәк булыуы, башҡортса стилдә уйнау мөһимлеген аңлатыу зарурлығын билдәләне. Бәхетиһән, башҡорт халҡының һәм беҙгә туғандаш башҡа халыҡтарҙың ҡумыҙ ярҙамында сығарған көй-моңдары ғына түгел, хатта уйнау ысулдары ла айырыла икән. Һуңғы осорҙа йәштәр араһында киң тарала барған, заманса көйгә әйәреп, төрлө ҡоштар тауышы сығарыу, тәбиғәт элементтарын индереп уйнау, якут һәм тыва халыҡтарына хас. Ә беҙҙең ата-бабалар ҡумыҙ ярҙамында ла көй сығарып, урынына еткереп уйнаған. Белгестәр әйтеүенсә, ҡумыҙ ярҙамында хатта "Урал", "Буранбай", "Ашҡаҙар" кеүек халыҡ йырҙарын да башҡарырға мөмкин.

- Тәүге йылдарҙа конкурсанттар, дөйөмләштереп әйткәндә, "Хәтирә" менән "Карабай"ҙы башҡарыуҙан уҙа алмаһа, быйыл беҙ "Салауат маршы", "Порт-Артур", "Циолковский", "Перовский" көйҙәрен тыңланыҡ. Иң мөһиме, беҙгә үҙебеҙҙең традицион уйын алымдарын һаҡлап ҡалырға кәрәк. Был йәһәттән Яҡут республикаһынан өлгө алырға мөмкин. Унда 2011 йылда барғанымда президенттары, премьер-министрҙары, бөтә халыҡ милли кейемдәрҙә сығып, хатта ил башында тороусылар ҙа ҡумыҙҙа уйнап күрһәтте. Музыка булған ерҙә һәр ваҡыт тыныслыҡ, дуҫлыҡ, бер кем насар уй уйламай, беҙҙең дә балаларыбыҙ шундай мөхиттә үҫергә тейеш, - тине жюри ағзаһы, билдәле ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов.

Ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәрҙең V төбәк-ара конкурсынан Татарстан, Алтайҙан, Ҡурған, Һамар, Свердловск һәм Пермь өлкәләренән, Мәскәү ҡалаһынан килгән ҡатнашыусылар ҙа бик ҡәнәғәт ҡайтты. Улар бындай конкурстар Рәсәй кимәлендә һирәк үткәрелеүе, әммә хатта Мәскәүҙә лә һуңғы йылдарҙа халыҡ фольклорына, боронғо милли уйын ҡоралдарына иғтибар арта барыуын, ҡумыҙ менән бер рәттән варган һәм хомус уйын ҡоралдары ла йәштәрҙе ҡыҙыҡһыныуын йәлеп итеүен билдәләне.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Музыка донъяһы - үҙенсәлекле, серле донъя ул. Уның һауаһын һулап, үҙеңә энергияһын алып йәшәү өсөн мөкиббән китеп йыр-моңға ғашиҡ булырға, эшләгән эшеңдең мөһимлегенә инаныу кәрәктер. Ҡумыҙсылар һәм өҙләүселәрҙең V төбәк-ара конкурсында ҡатнашыусылар төрлө телдә аралашыуҙарына ҡарамаҫтан, кешеләрҙә бер бөтөн, бер маҡсатлы итеп туплай алырлыҡ көскә эйә булған был донъяның бер өлөшө булыуҙарын иҫбатлай алды.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



*"Мираҫ" фольклор коллективы Гран-при яуланы.*

***✓ Беҙҙең күрше ауылдан бер апай ирен күрер өсөн Әлкәгә йүнәлгән (340 саҡрым тирәһе!) Нисә көн буйына йәйәүләп оло өмөт менән килеп еткән ҡатынға һалдаттар тейәлгән эшелондың иртә менән фронтҡа китеүен әйтәләр.***



ИНТЕРНЕТТАН



# ОПТИМИСТЫҢ...
## эше уң була

■ Сағыу төштәрҙе йыш күрәһегеҙме? Тимәк, һеҙҙең интеллект кимәлегеҙ бик юғары. Америка ғалимдары фекеренсә, төҫлө төштәр күрергә һәм уларҙы иҫтә ҡалдырырға интеллектары юғары булған кешеләр генә һәләтле. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ике меңдән ашыу кеше ҡатнаша. Уларҙың ҡайһы берҙәре йоҡлаған саҡта төш күрһәләр ҙә, уянғас, уны иҫләмәүҙәре тураһында белдергән. Тикшереүҙә ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө бөтөнләй төш күрмәүҙәрен әйткән. Тик аҙҙар ғына даими рәүештә төш күргән һәм уларҙы деталләп һөйләй алған. Был һынауҙар үткәс, тикшеренеүселәр уларҙың интеллектуаль һәләттәрен тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән дә инде.

■ Канада тикшеренеүселәре белдереүенсә, ыңғай фекер йөрөтөүселәр тормошта килеп тыуған көтөлмәгән хәлдәрҙе тиҙерәк һәм уңышлыраҡ хәл итә. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттарҙы бер нисә төркөмгә бүлеп, төрлө эмоциональ характерҙағы видеороликтар күрһәткәндәр. Күңелле сюжеттар ҡараусылар классификацион һүрәттәрҙе лә тиҙерәк аңлаған, башҡа мәсьәләләрҙе лә күберәк сисеүгә өлгәшкән. Шуға ла яуаплы йәки ижади эшкә тотонор алдынан  эксперттар кәйефте күтәреп алырға тәҡдим итә.

■ Америка тикшеренеүселәре әйтеүенсә, эш ваҡытында килеп тыуған көсөргәнештән эш өҫтәле янынан китмәй генә ҡотолорға була. Бының өсөн улар өс ысул тәҡдим итә. Беренсеһе - өҫтәл тартмаһына фисташка, кешью, миндаль һәм грек сәтләүеге һалып ҡуйығыҙ. Был сәтләүектәр стресты еңеләйтеү көсөнә эйә. Уларҙың составындағы витаминдар, аминокислоталар һәм антиоксиданттар стресс гормоны кортизол тәьҫирен баҫып, бәхет гормоны - серотонин бүленеп сығырға ярҙам итә. Икенсе ысул - акупунктур массаж. Белгестәр нервыларҙы тынысландырыу өсөн ҡолаҡ япраҡтарына массаж яһарға тәҡдим итә. Массаж мәлендә ҡолаҡта урынлашҡан биологик әүҙем нөктәләргә яһалған баҫым организмдағы бөтөн процестарҙы яйға һала, эске ағзалар эшмәкәрлеге яҡшыра, кәйеф күтәрелә. Бер сынаяҡ ҡара сәй ҙә нервыларҙы тәртипкә килтерергә булышлыҡ итер. Был эсемлектә файҙалы матдәләр һәм антиоксиданттар бик күп. Шуға ла сәй эсеүгә өс-дүрт минут ваҡытығыҙҙы йәлләмәгеҙ.

■ Бөгөн киң танылыу алған 3D-сеанстарға барыһы ла йөрөй алмай, сөнки фильм ҡараған ваҡытта уларҙың башы әйләнә. Белгестәр был сирҙе кибер ауырыу тип атай. Баҡтиһәң, кинотеатрҙарҙа бирелгән күҙлектәрҙең линзаһы менән күҙ хәрәкәттәре тура килмәй. Йәғни экрандағы объект кешегә ҡарай хәрәкәт иткән саҡта күҙ алмалары мөйөшө үҙгәрә, ә линзалар - юҡ. Шуға ла кеше экранға ни тиклем яҡыныраҡ ултыра, шул тиклем тиҙерәк ул үҙен насарыраҡ тоя башлауы ихтимал. Япония тикшеренеүселәре әйтеүенсә, ауырлы ҡатындарға, ололарға, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусыларға бындай сеанстар бөтөнләй тыйыла.

■ Ҡытайҙа етештерелгән уйынсыҡтарҙың 90 проценты - сәләмәтлек өсөн зарарлы. Уларҙың йә хәүефһеҙлеген билдәләүсе документтары юҡ, йә санитар-химик, токсикологик күрһәткестәре тап килмәй, йә маркировкаһы дөрөҫ түгел. Шулай уҡ "дөрөҫ булмаған" уйынсыҡтарҙың тауышы ла ҡолаҡты ярып алып бара, ти белгестәр. Магазин кәштәләрендә составында фенолформальдегид кеүек ағыулы матдә табылған уйынсыҡтар ҙа осрай.  Бындай уйынсыҡтар балаларҙың тын юлына насар тәьҫир итә, аллергия тыуҙыра.

МАТУР ХӘТИРӘ

**Ҡәрсәйем һандығына нисә йәш икән?1904 йылда тыуған Сибәрбикә ҡәрсәйемдең килен булып төшкәндә алып килгән ҡомартҡыһы ул. Уға һаҡ ҡына ҡағылып алам да, тыным ҡурылып, туҡтап ҡалам. Иҫ киткес сибәр, баҫалҡы, аҡыллы, мөләйем ҡәрсәйемдең, батыр, тәүәккәл, көслө, шул уҡ ваҡытта хис-тойғоға бай, йомшаҡ күңелле ҡартайымдың рухтары алдында баҙап ҡалам. Шулай ҙа был ҡомартҡы-һандыҡтың ғәзиз кешеләрем тураһында хәтирәләр һаҡлауын белеп, тулҡынланып, уны асырға баҙнат итәм.**

# ҠӘРСӘЙЕМ ҺАНДЫҒЫ



Янымда ултырған Шәмсиә апайым (атайымдың һылыуы) менән һарғайып бөткән фотоһүрәткә бағабыҙ. Унан беҙгә бөркөт ҡарашлы ҡартайым һәм сабыр ғына текәлеп ҡәрсәйем ҡарай. Ниндәй матур иштәр! Мин улар тураһында байтаҡ беләм кеүек. Тауҙар ҡуйынына һыйынып ултырған Ҡарабәрҙе ауылы кешеләре сығышы менән Бөрйән ырыуы Байулы араһына ҡарай. Ошо оло ҡәүемдең бер ярсығы - ҡәрсәйем үҙенә иште лә ошо ырыу кешеһенән һайлай. Бөрйән ҡәбиләһе Монаш араһы вәкиле булған (Күгәрсен районы Сирбай ауылынан) ҡартайым Таһир менән осраҡлы танышалар. Атаһы менән юл ыңғайы Ҡарабәрҙегә белеше Хәсән Билаловтарға һуғылған йәш егет үҙенең ғүмерлек йәрен - Сибәрбикәне таба. Фирғәнә далаларында баҫмасылар менән алышҡан ҡыҙыл командир Таһир Яхин яңы тормош төҙөүҙә әүҙем ҡатнаша, " Ҡыҙыл коммунар" колхозы бригадиры була. Ҡәрсәйем менән 4 балаға - Шәмғиә, Мөхтәр, Мазһар, Шәмсиәгә ғүмер бирәләр. Ҡан ҡойошло һуғыштарҙа ҡатнашһа ла, күңеле менән романтик, нескә хисле була ҡартайым. Хаттарын шиғри юлдар менән яҙа.

Һандыҡтан ҡартайымдың көндәлек дәфтәрен алам. Бында ҡартайым 1927 йылдарҙа Фирғәнәлә булған ваҡиғаларҙы һүрәтләй... Ә былары һуғыштан яҙған хаттары, йырҙары... Уны һуғышҡа 1941 йылдың 10 декабрендә алалар. 1942 йылда 9 сентябрь көнө Сталинград янында барған һуғышта һәләк була. Ҡулымда ҡартайымдың фронтҡа китер алдынан (Алкино) хәрби әҙерлек үтеп ятҡанда яҙған хаты. Ирҙәре, ағайҙары, һөйгәндәре менән осрашыу өсөн күпме ҡатын-ҡыҙ йәйәүләп барған унда! Беҙҙең күрше ауылдан бер апай ирен күрер, уға тыуған йорттоң наҡыҫ, әммә ғәзиз ризығын ауыҙ иттерер өсөн Әлкәгә йүнәлгән (340 саҡрым тирәһе!) Нисә көн буйына йәйәүләп, хәлдән тайып, оло өмөт менән килеп еткән ҡатынға һалдаттар тейәлгән эшелондың иртә менән фронтҡа китеүен әйтәләр. Ҡайтҡас, яҙмыш елененең әсеһенә, йөрәгененең әрнеүенә, арыуҙың сигенә еткән апай былай тип йырлаған, тиҙәр:

*Әлкә йәмһеҙ, Әлкә йәнһеҙ,*
*Әлкә ҡотһоҙ, мәсетһеҙ.*
*Тыумаһын, тыуһа тормаһын,*
*Минең кеүек бәхетһеҙ...*

...Ҡартайымдың иҫ киткес йылылыҡ менән яҙылған хатын уҡыйым да, күҙемә йәш, тамағыма төйөн ултыра. Ул һуғышҡа бармаһа, иҫән булып, беҙҙе күрһә, ниндәй бәхетле булыр инек - ниндәй матур тәрбиә, рухи байлыҡтан мәхрүм булғанбыҙ...

"Йә, нихәл, әбей? Иҫән генә тораһығыҙмы? Әбей, минән һиңә күп сәләм һәм дә күҙемдең ҡаралары кеүек күргән балаларыма бик күп сәләм. Шулай уҡ барса булған ағай-энеләргә. Апай-еңгәләргә, барыһына ла күп сәләм. Шулай уҡ барсаһына бәхиллек теләйем. Инәйем менән Хәйрулла ағайға күп сәләм һәм фатиха өмөт итәм. Әбей, мин был хаттан элек ике хат яҙғайным. Әллә алдың, әллә юҡ. Бында беҙҙең янға Нәҡиә еңгәй менән Йәнғәле ҡайнағаның ҡатыны килде. Исмаһам, ҡош телендәй генә хат та яҙмағанһығыҙ. Күңелем әллә нишләп ҡуйҙы. Мин көттөм... Күңел тигән нәмә бик нескә. Шулай, ситтә үпкәләрһеҙ булмай. Мин үҙем былай шәп кенә йөрөйөм. Командир булып уҡып, ун көнлөк курс бөтөп сыҡтым. Ҡайнаға (Сәғәҙей Билалов, Азат Абдуллиндың "Ун өсөнсө председатель" пьесаһынан Сәғәҙиевтың прототибы тип әйтәләр ине. Һуғышҡа тиклем колхоз председателе булған. Һабантуйҙарҙа көрәштә бирәүгә лә бил бирмәгән. Матур күңелле кеше булған. Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғышҡан. Ҡәрсәйемдең бер туған ағаһы) Демала икән, үҙем күргәнем юҡ. Беҙ уларға 4 саҡрым етмәй ятабыҙ. Бер нисә кеше арҡылы сәләм әйтеп ебәрҙе. Кейәү ауырып, беҙҙең яндан уны Уфаға оҙатҡайнылар. 25 көнләп була инде, бер хәбәр ҙә юҡ. Әллә ҡайтты микән, тип уйлайбыҙ. Үҙемдең янда яҡын иптәштәр күп: Минеғәле, Ғәлимөхәмәт, Ишмөхәмәт. Санъяптан бар. Нисек булһа ла һеҙ миңә хат яҙығыҙ үҙегеҙҙең хәлде белдереп, утын-бесән, мал хәлдәрен. Иген алдығыҙмы? Тағын кемдәр китте? Барыһын да яҙығыҙ.

Бындағы хәлдәрҙе бында килеп ҡайтҡан кешеләрҙән һорашырһығыҙ. Йәнә кешеләр барып ҡайта, мин дә барам, тип, юлға сыға күрмә, зинһар. Балаларҙы ынйытып, донъянды туҙҙыра күрмә. Минән үтенес шул. Хуш. Хатҡа яҙып һүҙҙәр бөтмәҫ. Йәнекәйем, инде һағындым. Бәлки, тупраҡтар ситтә булмаһа, ҡайтырмын. Мин ҡайтҡансы балаларҙы етем итмә. Хушығыҙ. Ҡыҙым Шәмғиә, килмәгән ерҙәрен килештереп уҡы. Хатты үҙең яҙ. Тиҙ яҙығыҙ. Хәлегеҙҙе белгем килә".

Ҡартайымдың ҡәрсәйемә яҙған наҙ тулы хаттарын, шиғыр-йыр юлдарын уҡыйым да, уларға һоҡланып бөтә алмайым. Ғәзиздәрем икеһе лә матур йырлаған, тиҙәр. Уларҙың моңло тауышы ҡайсаҡ ҡолағымда яңғыраған кеүек. Ҡартайым хатынан тағы юлдар:

"Ҡайсаҡ йөрәгемдә урғылған йырҙарҙы ҡысҡырып йырлап ебәрәм...

*Иртәнсәккәй тороп тышҡа сыҡһам,*
*Ҡамсат ҡына бүркем сөйҙә юҡ.*
*Йәнкәй-йәнәшәмде һораһағыҙ -*
*Һыу алырға киткән,өйҙә юҡ.*
*Аҡбуҙаткайыма йөктәр һалдым,*
*Туҡталмайса малкай юл үтһен.*
*Беҙгә хаслыҡ ҡылған был дошман*
*Яҙ ауырып ятып, көҙ үлһен.*
*Һаҡмарҙарға төштөм, ай, һал менән,*
*Һал бәйләнем һары тал менән.*
*Әхирәткәй күрке баҡый-иман менән,*
*Донъя күрке һөйгән йәр менән.*
*Ишеккәйем алды, ай, алмағас,*
*Иртә сыҡһам шуға таянам.*
*Төштәремдә күреп, ай, ҡыуанам*
*Йөрәккәйем һығылып уянам.*
*Түңәрәккәй күлдә, ай, күк суртан,*
*Күреккәйҙәре ҡатып үлмәһен.*
*Күп нужалар күрҙе, ай, был башым,*
*Бер рәхәттәр күрмәй үлмәһен.*
*Бара торғас бер ултырҙым*
*Аҡ ҡайынға етеп, һалҡынға.*
*Мин ултырған ергә күк үлән дә үҫмәҫ*
*Күкрәгемдән сыҡҡан ялҡынға.*
*Һауаларҙа осҡан, ай, ҡоштарҙың*
*Ҡанат осҡайында дарманы.*
*Һине генә миңә, мине һиңә*
*Ҡауыштырыу Хоҙай фарманы.*
*Ебәк тә генә билбау, ай, билеңдә,*
*Ефәкселәр бармы илеңдә?*
*Мәжлестәргә инеп һүҙ башлайһың,*
*Ил солтанымы әллә үҙең дә?*
*Аҡ ҡарсыға кеүек түшен киреп,*
*Ҡаҙҙар бара һыуға, ҡойоға.*
*Башҡайҙарына нужа төшһә,*
*Арыҫлан кеүек ир ҙә бойоға.*
*Аҡҡош микән килә, ай, ҡыр буйлап,*
*Тауыштары килә һыу буйлап.*
*Аҡылһыҙ ҙа ир түгел инем,*
*Башҡайҙарым бөттө һеҙҙе уйлап*".

Эйе, күп беләм һәм шул ваҡытта бик аҙ беләм кеүек мин ҡартайым һәм ҡәрсәйем тураһында. Күңелемдә бер яҡты донъя булып йәшәй улар. Яҙмышыма рәхмәтлемен, бәләкәйҙән ауылымдың ағинәйҙәре тәрбиәһендә үҫтем. Матур (Мәрфуға) инәй, Хәҙисә, Сәрби, Минзифа инәйҙәрҙең рух шәрифтәре алдында баш эйәм. Әммә һәр ваҡытта йәндәремде әсеттергән бер тойғо булды. Минең өләсәйем, ҡәрсәйем, ҡартайым булманы. Өләсәйем Шәмселбанат ауылда абыстай булған. Хәмиҙулла бабайым менән 6 балаға ғүмер биргәндәр. Бәләкәстәре Ниғмәт ағай (Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы) 1945 йылда Хәмиҙулла бабай һуғыштан ҡайтҡас тыуған. Баланан һуң шәбәйеп китә алмай, 38 йәшендә вафат була өләсәйем. Ә Сибәрбикә ҡәрсәйем 1950 йылда ауырып үлә. Уны Шәмиғол хәлфәгә лә алып барып ҡарайҙар. Көндән -көн һурығып, 4 балаһы өсөн йәндәре өҙөлөп, мәңгелеккә күҙен йома. Мин күп йылдар һуң тыуһам да, уларҙы күрмәһәм дә, ошо ҡәҙерле кешеләремде һағынып йәшәйем. Уларҙың йылы ҡараштарынан, арҡамдан һөйөр йылы ҡулдарынан мәхрүммен.

Һаҡ ҡына ҡағылам ҡәрсәйем һандығына. Рәхмәтлемен изге ҡомартҡыға күңел дәфтәремә яңы биттәр яҙғаны өсөн...

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**

✓ *Рәжәб айының һәр төнө һәм һәр йомаһы оло ҡиммәткә эйә. Был айҙың тәүге кесе йомаһында шулай уҡ ураҙа тотоу, ә ошо көндән һуңғы йомаға ҡарай төндө йоҡламайынса ғибәҙәттә үткәреү хуплана.*



*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# РӘЖӘБ - АЛЛАҺТЫҢ АЙЫ

**Рәжәб - шәғбән һәм рамаҙан айҙары менән бер рәттә изге һаналған өс айҙың береһе. Бәйғәмбәребеҙ был өс ай тураһында: "Рәжәб - Аллаһтың айы, шәғбән - минең айым, рамаҙан иһә өммәтемдең айылыр", - тигән һәм: "Аллаһым, беҙгә рәжәб һәм шәғбәнде мөбәрәк ҡыл һәм беҙҙе рамаҙанға өлгәштер", - тип доға ҡыла торған булған. Был айҙарҙа Аллаһы Тәғәлә ҡолдарына ғәмәлдәр дәфтәрен тулыландырыу өсөн күп мөмкинлектәр бирә, изге эштәр, ғибәҙәттәр өсөн әжер-сауаптар күп тапҡырҙарға арттырыла һәм ихлас күңелдән гонаһтарының ярлыҡаныуын һорағандарҙы Аллаһы Тәғәлә ғәфү итә.**



Мөхәммәт бәйғәмбәр: "Әгәр ҙә үлем алдынан һиллек, тыныслыҡ булыуын, яҡшы ахыр (мосолман булып был донъянан китеү) һәм шайтандан һаҡланыуҙы теләһәгеҙ - ураҙа тотоп һәм ҡылған гонаһтарығыҙға тәүбә итеп, ошо айҙарҙы хөрмәт итегеҙ",- тип әйтә. Икенсе хәҙискә ярашлы, изге ғәмәлдәр өсөн сауап һәм гонаһтар өсөн яҙа 70 тапҡырға арттырыла.

Сәүбән исемле сәхәбә һөйләй: "Бәйғәмбәр менән зыяратҡа ингәндә мин уның янында инем. Ул туҡтаны һәм мин уның бите буйлап йәштәре аға башлауын күрҙем. Ул шул тиклем ныҡ иланы, хатта күкрәгендәге күлдәге һыуланды. Шул ваҡыт мин Бәйғәмбәр янына килдем дә: "Йә, Аллаһ Рәсүле, һин ни өсөн илайһың? Һиңә аяттар килдеме?"- тип һораным. Ул: "Йә, Сәүбән, ошо зыяратта ерләнгәнгәндәр ҡәбер ғазаптарынан ыҙа сигәләр. Мин шуның өсөн илайым", - тип яуап бирҙе. Һуңынан: "Әгәр ҙә рәжәб айының бәғзе бер көндәрен генә булһа ла ураҙала, ә төндәрен Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәттә үткәрһәләр, улар ошо ҡот осҡос яҙаларҙан ҡотолор ине", - тип өҫтәне". Шулай уҡ Бәйғәмбәребеҙ әйтте: "Кем дә кем рәжәб айының 1-се төнөн ғибәҙәттә үткәрә, уның ҡәлбе башҡа кешеләрҙең ҡәлбе үлгәндә лә үлмәйәсәк. Етмәһә, Аллаһы Тәғәлә уны шул тиклем үҙ рәхмәтенә ирештерәсәк һәм гонаһтарынан таҙартасаҡ, ул яңы тыуған бала кеүек, гонаһтарҙан таҙа буласаҡ. Һәм ошо төндә ебәрелгән Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте аша кеше тамуҡ ғазаптарына хөкөм ителгән 70 кеше өсөн шәфәғәт ҡыла ала",- тип әйтте. Шулай уҡ икенсе хәҙистә: "Хәтерҙә тотоғоҙ, рәжәб - Аллаһы Тәғәлә айы, кем дә кем ошо айҙа бер көн булһа ла ураҙа тота, Раббыбыҙ уның менән риза буласаҡ", - тип әйтелә.

Рәжәб айының исемдәре күп, шуларҙың береһе Шәхруллаһ әл-Әсәәб, йәғни Аллаһы Тәғәләнең йомартлығының айы тип атала. Хәҙистә әйтелә: "Кем дә кем ошо айҙа бер көн булһа ла ураҙа тота, ул Аллаһы Тәғәләнең оло рәхмәтенә һәм хуплауына ирешә, ике көн ураҙа тотоусы һәр береһе тауға тиң булған ике әжер ала, өс көн ураҙа тотоусыға уны йәһәннәм утынан айырған оло соҡор яһаласаҡ. Был соҡор шул тиклем ҙур буласаҡ, уның бер яғынан икенсе яғына сығыу өсөн йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ. Өс көн ураҙа тотоусы аҡылдан яҙыуҙан, артыҡ йыуанайыуҙан һәм махау ауырыуынан (проказа) имен буласаҡ, Дәджәлдән һағы буласаҡ. Биш көн ураҙа тотоусы ҡәбер ғазаптарынан ҡотоласаҡ. 6 көн ураҙа тотоусы тулы айҙан яҡтыраҡ һәм матурыраҡ йөҙ менән Ҡиәмәт көнөндә терелтеләсәк. 7 көн ураҙа тотоусыға, йәһәннәмгә эләкмәһен өсөн, Аллаһы Тәғәлә тамуҡтың 7 ҡапҡаһын ябасаҡ, 8 көн тотоусыға Йәннәттең ҡапҡалары асыласаҡ. 14 көн ураҙа өсөн Аллаһы Тәғәлә бер кем дә ишетмәгән матур нәмә менән бүләкләйәсәк. Рәжәб айында 15 көн ураҙа тотоусыға Аллаһы Тәғәлә шундай ҙур дәрәжә бирәсәк, бер фәрештә лә, нәби-рәсүлдәр ҙә уның янынан "Ҡотлайбыҙ һине, һин ҡотҡарылғандарҙан һәм именлектә булғандарҙан", тип әйтмәйенсә үтмәйәсәк".

Рәжәб айының һәр төнө һәм һәр йомаһы оло ҡиммәткә эйә. Был айҙың тәүге кесе йомаһында шулай уҡ ураҙа тотоу, ә ошо көндән һуңғы йомаға ҡарай төндө йоҡламайынса ғибәҙәттә үткәреү хуплана. Был кисте, йәки төндө Ләйләтүл Рәғәиб тип йөрөтәләр. Был төндә Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәттең (с.ғ.с.) атаһы менән әсәһе никахлашҡан. Шулай уҡ был төндө Мәрхәмәт, илтифат төнө лә тип йөрөтәләр. Доғалар кире ҡағылмай, ғибәҙәттәр өсөн ҙур сауап бирелә. Рәғәиб һүҙе - Аллаһы Тәғәләнең ғәфү итеүенә өмөт, Уның Үҙ ҡолдарына ҡарата күрһәткән рәхмәте, доғаларҙың, ялбарыуҙарҙың ҡабул булыуы, тип тәржемә ителә.

Быйыл рәжәб айы 19 апрель ҡояш байыу менән башлана, Рәғәиб кисе 23 апрелдән 24 апрелгә ҡарай төнгә тура килә.

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Йыһан ҡанундары

Аҡса ағымының әйләнеше үҫешкә ҙур йоғонто яһай. Мәҫәлән, һеҙҙең ни бары 100 долларығыҙ бар, ә һеҙ 1500 доллар бурыслыһығыҙ. Ошо 100 һумды һаҡлап тороп, тағы ҡайҙандыр 1400 килеп сығырын көткәнсе, әйләнеш ҡанунын ғәмәлдә ҡулланығыҙ. Һаранлыҡ торғонлоҡҡа килтерә, шуға күрә булған субстанцияны әйләнешкә индерергә һәм энергетик блокты алып ташларға кәрәк. Ошо 100 долларға йәбешеп ятып, һеҙ аңығыҙҙа ихтыяж көйләнеше тыуҙыраһығыҙ, ә уларҙы әйләнешкә индерһәгеҙ, аңығыҙға һәм Йыһанға артабан тағы ла күберәк буласағы тураһында сигнал бирәһегеҙ һәм шулай итеп ҙурыраҡ сумма аҡса ылыҡтыраһығыҙ. Мөхәббәттә лә шундай уҡ алым ҡулланырға кәрәк икәнен аңлатып торорғамы? Мөхәббәт әйләнешен уятып, яуапҡа тағы ла ҙурыраҡ мөхәббәт алырһығыҙ. Үҙегеҙгә кәрәкмәгән нимәнәндер ҡотолоғоҙ һәм үҙегеҙгә тигән тағы ла ҙурыраҡты ҡабул итергә әҙерләнегеҙ.

**3. Күҙаллау ҡануны.** Уңышлы булыу тәү сиратта беҙҙең башыбыҙҙа ярала. Һеҙ аңлы рәүештә нимәлер күҙаллаһағыҙ, ғәмәлдә, төпкө аңығыҙҙы ошо уйығыҙҙы физик планда матдиләштереүгә программалайһығыҙ. Мин маҡсаттар яҙылған карточкалар, көндәлектәге ыңғай формулировкалар, идеаль көн сценарийы, автомобиль руленә, һыуытҡысҡа, көҙгөгә яҙыуҙар беркетеп ҡуйыу яҡлы. Һәр ваҡыт ошоларҙы күреп, улар һеҙҙең хәтерегеҙгә төшөрөп торһа, нимәгә эйә булырға теләгәнегеҙҙе һәр саҡ иҫегеҙҙә тотаһығыҙ һәм был уй төпкө аңығыҙҙа нығына. Процеста ни тиклем эмоциялар нығыраҡ ҡатнаша, шул тиклем аңығыҙҙағы картина асығыраҡ була бара. Картина ни тиклем асыҡ, шул тиклем уны тормошҡа тиҙерәк ашырасаҡһығыҙ.

**Уңыш ылыҡтырыу планы.** Был турала әйтеп киткәйнем инде. Планығыҙҙы фотолар, һүрәттәр һәм тормошоғоҙға нимә ылыҡтырырға теләйһегеҙ, шул туралағы раҫлауҙар менән тултырығыҙ. Мин үҙем планды "эш", "рухиәт", "мөнәсәбәттәр" һ.б. шундай секторҙарға бүлергә яратам. Һуңынан уларҙың һәр өлөшөнә нимә эшләргә, нимәгә эйә булырға, кем булырға теләйем, шундай һүрәттәр ҡуйып сығам. Бының өсөн бер-ике аҙна элек үҙегеҙҙе ҡыҙыҡһындырған материалдар, һүрәтле журналдар йыя башларға кәрәк. Әйтәйек, гитарала уйнарға өйрәнергә теләйһегеҙ икән - гитара һүрәтен йәбештерегеҙ, әммә теләһә ниндәй түгел, ә тап һеҙ теләгәнде. Йәки бестселлер булырлыҡ китап яҙырға теләйһегеҙ икән, шундай китаптарҙың исемлеген алып, унда беренсе торғанының исемен буяп, үҙегеҙҙең китабығыҙҙың атамаһын ҡуя алаһығыҙ. Планға мәғлүмәтте нисек урынлаштырыу буйынса айырым ҡағиҙәләр юҡ. Бары тик ундағы һүрәттәр һеҙҙең өсөн нимәлер аңлатһын һәм ниндәйҙер әһәмиәткә эйә булһын. Башҡалар уны аңлаймы, юҡмы - был кәрәк тә түгел, әммә һүрәттәргә ҡараған һайын, һеҙ ошо объекттарҙың нимә символлаштырыуын белергә тейешһегеҙ. Уларҙы көн һайын күреү төпкө аңығыҙҙа хыялығыҙҙы ысынбарлыҡҡа әйләндереү йүнәлешендә хәрәкәт итергә теләк уятыр. Шуға күрә, тәүҙә уңышығыҙҙың картинаһын башығыҙҙа тыуҙырығыҙ, һуңынан уны тормошҡа ашырығыҙ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

*ЭТИКЕТ*

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни йәмғиәттә үҙеңде тотоу ҡағиҙәләре



- Ир-ат бер ҡасан да ҡатын-ҡыҙҙың, хатта дуҫлашып йөрөгән ҡыҙының да, ҡатынының да ҡатын-ҡыҙҙар сумкаһын алып йөрөмәй. Ауыр әйбер һалынған сумкалар өсөн генә был ҡағиҙәнән ситләшергә мөмкин. Ошо уҡ ҡағиҙә өҫ кейеменә лә ҡағыла. Әгәр эҫе булып, ҡатын-ҡыҙ пальто йәки курткаһын сисһә, ул уны үҙе тоторға тейеш. Ир-ат ҡатын-ҡыҙҙың өҫ кейемен театр һәм башҡа йәмәғәт урындарында гардеробҡа тапшырыу өсөн генә алырға мөмкин. Әлбиттә, бында ла ҡағиҙәнән ситләшеү осраҡтары бар. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ ауырлы булһа, ауырыу сәбәпле өҫ кейемен үҙе тота алмаһа, һәм башҡалар.
- Урамда барғанда иптәшегеҙ таныш булмаған кеше менән һаулыҡ һорашһа, һеҙгә лә һаулыҡ һорашыу урынлы.
- Бина эсендә ҡатын-ҡыҙ бирсәткә һәм эшләпәһен сисмәҫкә лә мөмкин, ләкин шапка һәм бейәләйҙе сисмәү - ҡабул ителмәгән күренеш.
- Хушбуй ҡулланыуҙың алтын ҡағиҙәһе - сама белеү. Әгәр ҙә кисен дә хушбуйығыҙҙың еҫен тойһағыҙ, тимәк, эргә-тирәләгеләр күптән еҫ тейеп ҡолап бөткән.
- Ниндәй вазифа биләүгә һәм ниндәй йәштә булыуға ҡарамаҫтан, бинаға инеүсе беренсе булып һаулыҡ һораша.
- Үҙ-ара яҙышыу серен һаҡлау мөһим. Ата-әсәләр балаларының, ир менән ҡатын бер-береһенең хат, смс-хәбәрҙәрен уҡыуы матур күренеш түгел. Был хаҡта онотторға ярамай.

**Гөлназ САФУАНОВА әҙерләне.**



## 20 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**С 05.00 до 11.45 вещание осуществляется по кабельным и спутниковым сетям**
05.00 "Доброе утро".
